ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

29-5 апрель - май (алағарай - һабанай) 2017

№ 17 (747)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ошондай хеҙмәт өлгөләре...**

үткәндә генә ҡалдымы?



7

**Йөҙ йыл йәшәһен ине "Алтын ай",**

йәки Мәскәүҙәге милләттәштең фиҙакәрлеге тураһында



8-9

**Арҙаҡлы ғалим да...**

яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре лә, ағайыбыҙ ҙа



11

**Ағы барҙың - туғы бар,**

йәки, Һөттөң кәҙерен белеүселәр тураһында



12

**ТВ-программа** 14

***Ҡайһы саҡта етәксе поезддан алда сапҡан кешегә оҡшап китә: барыһы ла уны поездың хәрәкәте менән идара итә, тип уйлай, ләкин етәксе бит шуны белә - туҡтаһа, поезд уны иҙеп китәсәк.***

***(Петр Таранов).***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Законһыҙ алкоголь эсемлектәр менән һатыу иткән өсөн штраф күләмен арттырыу һәм административ яуаплылыкты көсәйтеү саралары эскелекте сикләүгә булышлыҡ итерме?*

***Мәүҙиғә БАЙМӨХӘМӘТОВА, 2006 - 2014 йылдарҙа Әбйәлил районы Ҡырҙас ауыл хакимиәте башлығы:*** Оҙаҡ йылдар ауыл хакимиәтен етәкләргә тура килде һәм шул осор буйына эскелеккә ҡаршы туҡтауһыҙ көрәш тә алып барҙыҡ. Был эште әле лә туҡтатҡаныбыҙ юҡ, сөнки был яман ғәҙәт менән бик уяу булырға кәрәк. Ғөмүмән, эскелек тамыр йәйгән ил йәне лә, тәне лә сирле кешене хәтерләтә. Ә ауырыуҙы һауыҡтырыу өсөн комплекслы дауалау саралары талап ителә. Бөгөн дәүләт кимәлендә эскелеккә ҡаршы күрелгән осраҡлы, тип әйтәйемме, дөрөҫөрәге, өҙөк-йыртыҡ саралар менән генә ауырыуҙы дауалап булмай. Ошо араларҙа алкоголь эсемлектәргә хаҡ артыуы хаҡында ишетеп, тағы бер борсолдом: араҡыға хаҡ арттырып ҡына эскелекте туҡтатып буламы һуң? Киреһенсә, был ғаилә бюджетына һуғасаҡ ҡына бит, сөнки эскән кеше шешәһе 500 торһа ла аласаҡ уны. Йәки башҡа берәй әмәлен таба: көмөшкә йә булмаһа, ситтән килтерелгән сифатһыҙ арзан араҡы һатыусыға йүгерә: уларҙың ишеге көнө-төнө асыҡ. Аҡсаң булмаһа, көтәсәккә йәки ит, картуф, май, он, ярма кеүек ашантыға алмаштырып та биреп ебәрәләр. Ана шул күрәләтә кеше ағыулап ятыусы ҡомһоҙҙарға ҡарата санкция сараларын ҡәтғиләштереү күптән кәрәк ине, ләкин уларға штраф күләмен арттырыуҙы ла мин бер яҡлы ғына эш, тип аңлайым. Таяҡ ике осло була, тигәндәй, эскелектең икенсе осондағы аныҡ кешеләр хаҡында ла онотоп ебәрергә ярамаҫ ине, сөнки ҡулланыусыһы бар икән, уларҙы тәьмин итеп тороусыһы ла мотлаҡ табыла. Араҡыға, көмөшкәгә, арзан спиртлы эсемлектәргә ихтыяж булмаһа, уны һатыусыһы ла булмаҫ ине. Шуға ла иң тәүҙә ана шул ағыуҙы ҡулланыусылар - ҡырын тейәргә яратыусылар менән эшләргә кәрәклегенә үҙ тәжрибәмдән сығып инанғанмын. Олоһона, кесеһенә, яманына, яҡшыһына, хатта эскесегә ҡарата ла битараф, туң булмаҫҡа! Эскеселә лә кешене күрә белергә, нилектән уның ошо хәлгә төшөү сәбәптәрен аңларға тырышырға, кәрәк икән - ярҙам ҡулы һуҙырға тейеш етәксе. Әйткәндәй, уның үҙенең айыҡлыҡ өлгөһө, абруйлы һәм ихтирамға лайыҡ шәхес булыуы иң беренсе шарт. Шунһыҙ эскән кеше менән һөйләшеп ҡара! "Үҙеңде бел!" тип кенә ебәрәсәк ул, гәрсә һин байрамдарҙа, туйҙа һ.б. шулай онотҡанда бер генә ҡулланһаң да. "Мәҙәни" эсеү эскелектән бер нимәһе менән дә айырылмай - шуны белһен етәксе кеше. Икенсенән, ауылдарыбыҙҙа халыҡты берләштереп, татыулыҡҡа, бер-береңә изгелекле мөғәмәлә тәрбиәләүсе йолаларыбыҙҙы, эскеһеҙ байрамдарыбыҙҙы, дини ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе тергеҙеп, ауылдаштарҙы шул сараларға ныҡлап йәлеп итеү, халыҡты иман юлына баҫтырыу кәрәк. Бер һүҙ менән әйткәндә, ауылдаштар өсөн сәләмәт тормош рәүеше ғәҙәткә әүерелергә тейеш. Шул осраҡта ғына эскелектән ҡотолорға мөмкиндер, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БЫЛ АЙҘА...*

# СӘСКӘЛЕ МӘЛ ЕМЕШ БИРҺЕН

**Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы (1) менән башланыусы май айын халҡыбыҙ юҡҡа ғына Һабанай тип атамаған. Игенсегә байрам итергә иртәрәк шул әле: ул еңдәрен төрөп һабан һөрә, сәсеүгә сыға, сөнки халҡыбыҙҙың "Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың" тигән тағы бер аҡылын яҡшы белә.**



Һабанайҙа бөтөн донъя саф йәшеллеккә күмелә. Ҡыш буйы ҡурала зарыҡҡан мал-тыуар һутлы йәш үләнгә ҡаҙала. Юҡҡа ғынамы ни май майын маҡтай халыҡ: майғы һөттән бәпембә сәскәһелəй һап-һары, тәмле май яҙа уңған хужабикәләр. Әйткәндәй, иң тәүге яҙғы сәскәләрҙең береһе бәпембәнән һары бал кеүек шифалы ҡайнатма эшләүсе оҫталар ҙа бар. Был дарыу үләненең тамыры ла бик файҙалы: уны йыуып, киптереп, ваҡларға кәрәк. Мунса "биреләре" май миндеге бәйләп ҡалырға ашыға. Йәш ҡайынҡайҙар йәл булһа ла, был да үҙенә күрә дауаланыу ысулы бит. Ҡыҫҡаһы, тәбиғәтебеҙҙе рәнйетмәй генә уның шифалы хазиналары менән файҙаланырға форсат тыуа. Был хаҡта даими рәүештә, айырыуса быйылғы Экология һәм айырым ҡурсыуға алынған тәбиғәт биләмәләре йылында, урындағы матбуғат баҫмалары яҙып, иҫкәртеп тора.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

*✓ Йәмғиәтебеҙҙәге бөгөнгө эскелек күренеше туранан-тура илдәге социаль-иҡтисади хәлгә бәйле булыуын да танырға кәрәк. Эш юҡ, бөтәһе лә Себер сығып китә алмай. Ихтыяры йомшаҡ кешеләр депрессияға бирелә, эсә башлай.*



МӨҺИМ ВАҠИҒА

# РУХЫБЫҘ БАЙЫНЫ

**Теле барҙың юлы бар, тигән мәҡәл бар башҡорттарҙа. Был йор һүҙҙе кем нисек аңлай инде: берәүҙәр тел ярҙамында Ҡытайға барып етеүҙе, икенселәр иһә донъяла милләт булараҡ һаҡланып ҡалыуҙы күҙ уңында тота. Ә бына Башҡорт дәүләт университетында өсөнсө тапҡыр үткәрелгән "Башҡорт теленән региональ диктант" акцияһы был ике маҡсатты бергә берләштерә.**



Уҡыу йортоноң башҡорт тел ғилеме һәм этномәҙәни белем биреү кафедраһы быйыл диктант өсөн Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйеновтың "Әсәм теле - сәсән теле" әҫәренән өҙөк тәҡдим итте. Тексты Башҡортостандың халыҡ артисы Рәсүл Ҡарабулатов уҡыны. Текст авторы Ғайса Батыргәрәй улының да ҡатнашыуы сараның мәртәбәһен тағы ла күтәреп ебәрҙе. Быйыл башҡорт теленән диктантты Башҡорт дәүләт университетының башҡа факультеттарында, вуздың Стәрлетамаҡ, Учалы, Сибай, Бөрө, Нефтекама ҡалаһы филиалдарында, республиканың төрлө белем биреү учреждениеларында яҙҙылар. Хатта ул көндө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ултырышы ла диктант яҙыуҙан башланды. Филология фәндәре докторы Хәҙисә Солтанбаева әйтеүенсә, тәүге йылда 3054 кеше диктант яҙһа, былтыр 4 меңгә яҡын эш тикшерелгән, быйыл ҡатнашыусыларҙың тағы ла күберәк булыуы көтөлә. "Акцияға Силәбе өлкәһе, Ямал-Ненец автономиялы округында йәшәүсе милләттәштәребеҙ ҙә әүҙем ҡушылды. Башҡорт дәүләт университеты аудиторияларында ла кеше күп булды, хәҙер эштәрҙе тикшерәһе генә ҡалды", - ти Хәҙисә Вәли ҡыҙы.

Юғары уҡыу йорто ректоры Николай Морозкин әйтеүенсә, башҡорт теленән региональ диктант яҙыу фәһемле бер байрамға әүерелгән. "Бөгөн был аудиторияла мәктәп уҡыусыларын, студенттарҙы һәм оло быуын кешеләрен бергә күреүгә ҡыуаныслы. Тимәк, туған телен, мәҙәниәтен ҡәҙерләгән, республиканы яратҡан һәм атаәсәһен хөрмәт иткән шәхестәр йыйылған бында", - тине ул. Диктант яҙырға килеүселәрҙән дә был акцияның рухты күтәргән, туған телгә иғтибарлы булырға өйрәткән сара икәнлеге тураһында бик күп фекерҙәр ишетергә тура килде. "Синыфташтар менән диктант яҙырға килгәйнек, текст бик ауыр булманы. Рәсүл Ҡарабулатов матур уҡыны, хатта күңел елкенеп китте", - тине Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 9-сы синыф уҡыусыһы Рүзилә Иҫәндәүләтова.

Бына шулай, "Башҡорт теленән төбәк диктант" акцияһында ҡатнашҡан һәр кем грамоталы булыуын һынауҙан тыш, рухын да байытып ҡайтты. Әйткәндәй, диктант һөҙөмтәләрен 28 апрелдән һуң regdict.bashedu.ru сайтына инеп ҡарарға мөмкин.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Законһыҙ алкоголь эсемлектәре менән һатыу иткән өсөн штраф күләмен арттырыу һәм административ яуаплылыҡты көсәйтеү саралары эскелекте сикләүгә булышлыҡ итерме?



**(Башы 1-се биттә).**

***Рауил ЙӘНСУРИН, Оҙаҡ йылдар Баймаҡ районы Темәс ауыл хакимиәте башлығы булып эшләгән:*** Ошоға тиклем эскелеккә ҡаршы һөҙөмтәлерәк, закон нигеҙҙәренә таянып көрәшер өсөн законһыҙ рәүештә алкоголь эсемлектәр менән йәшерен сауҙа итеүселәргә ҡаршы саралар бик йомшаҡ һәм юҡ кимәлендә ине. Дөрөҫөн әйткәндә, көмөшкәселәргә лә, Ҡаҙағстан, Ырымбур, Магнитогорск яҡтарынан килтерелгән контрафакт алкоголь эсемлектәр менән "итәк аҫтынан" сауҙа итеүселәргә ҡарата ла бер ниндәй тыйыу саралары ҡулланып булмай ине. Штраф күләме ни бары 2 меңдән артманы. Был күпләп лицензияһыҙ араҡы һатыуҙан килгән табыш өсөн ҙур юғалтыу түгел ине. Шуға күрә лә штрафты арттырыу, яуаплылыҡ сараларын ҡәтғиләштереү кәрәклеге тураһында беҙ һайлаусылар менән осрашыуға килгән һайын депутаттарға, шулай уҡ РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаровҡа гел әйтә килдек. Ниһайәт, матбуғатта хәбәр ителеүенсә, "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында"ғы РФ Кодексына өҫтәмә статья индереү мәсьәләһе хәл ителә. Уның буйынса, законһыҙ алкоголь продукцияһы һатҡан өсөн физик шәхестәргә - 300-ҙән алып 500 меңгә тиклем, ә эшҡыуарҙарға һәм юридик шәхестәргә 1 млн һумға тиклем штраф күләмен арттырыу ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта, әгәр берәйһе сифатһыҙ араҡы эсеп ағыулана йә башҡа төрлө зыян күрә икән, был продукцияны һатҡан кешегә ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатыласаҡ. Был яңылыҡ, һис шикһеҙ, эскелеккә ҡаршы көрәштә булышлыҡ итер, тип ышанам. Юғиһә бит ауылда кемдәрҙең көмөшкә ҡойоуы, арзан араҡы һатыуын белеп торһаң да, ҡулда тейешле закон акты булмағас, бер ниндәй ҙә сара күреп булмай ине. Хәҙер ундайҙарҙың бер нисәүһенә генә әлеге штрафты һалһындар - был һис шикһеҙ башҡаларын да аҡылға ултыртасаҡ, миңенсә, сөнки юғалтыу ярайһы тос буласаҡ. Ә шулай ҙа эскелек менән көрәштә был бер яҡлы ғына сара. Әлеге ағыулы эсемлектәрҙе һатып алыусылар булмаһын өсөн тырышырға кәрәк бит. Быныһы инде бик ауыр мәсьәлә. Ошо тәңгәлдә ирекһеҙҙән совет осоронда ҡулланылған ЛТП - дауалау-хеҙмәт учреждениелары эше иҫкә төшә. Ә бит был бер ҙә насар түгел ине. Һәр хәлдә, заманында ЛТП-ны яманлаған бер кемде лә хәтерләмәйем, юғиһә, беҙ элеккенән көләргә генә оҫтабыҙ, ә аныҡ эшкә килгәндә, халыҡ өсөн файҙалы бер нәмә лә эшләй алмайбыҙ. Совет осоронда, исмаһам, барыбер ниҙер эшләнә, тормош төпкөлөндәгеләр яҙмышы ла ҡайғыртыла ине. Ә бөгөн эскеселәр тулыһынса йәмғиәт сүплегенә ырғытылған, улар үҙ проблемалары менән япа-яңғыҙ йә үҙҙәре кеүектәр менән бергә. Берәү ҙә ярҙам ҡулы һуҙырға теләмәй. Ә мәсьәлә шул уҡ баяғыса дәүләт кимәлендә сара күреүҙе талап итә. Бәлки, әлеге ЛТП-ларҙы тергеҙеү һөҙөмтә бирер ине?

Тағы бер нәмә: элек ауыл хакимиәттәре янында эскелеккә ҡаршы көрәш комиссиялары булды һәм улар ҙа ниҙер эшләргә тырыша ине. Хәҙер улар бөтөрөлөп, район кимәлендә генә тороп ҡалды. Тәбиғи, улар һәр бер ауылдағы хәл менән хәбәрҙар була алмай. Йәмғиәтебеҙҙәге бөгөнгө эскелек күренеше туранан-тура илдәге социаль-иҡтисади хәлгә бәйле булыуын да танырға кәрәк. Эш юҡ, ә ғаиләне аҫрарға кәрәк. Бөтәһе лә Себер сығып китә алмай. Ихтыяры йомшаҡ кешеләр депрессияға бирелә, эсә башлай. Шул урында мал-тыуар үрсетеп, баҡса үҫтереп, умарта тотоп, бийма-кейеҙ баҫып, бура бурап, кешегә өй һалышып, балта оҫталығы менән дә ғаиләңде аҫрарлыҡ ҡына аҡса табырға булыр ине лә, тик уның өсөн елкә кәрәк шул...

***Сәмиға УРАҘҒОЛОВА, блогер:*** Уҡыған һәм ике ҡулына эше булған кешеләр мине аңламаҫ, ахырыһы, шулай ҙа үҙ фекеремде белдереп үтмәй булдыра алмайым. Миңә 48 йәш, ауылда йәшәйем. Мәктәп йәшендәге ике балам бар. Ирем менән айырылыштыҡ. Алимент түләмәй, ситкә сығып китте лә ғәйеп булды. Хәҙер минең хәлде самалай торғанһығыҙҙыр, йәмәғәт. Ауылда эш юҡ, хатта иҙән йыуыусы ла кәрәкмәй, сөнки клуб, медпункт, мәктәпте шартлатып ябып бөттөләр, уныһы үҙегеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Пенсияға әле бик алыҫ, мин нисек йәшәргә, балалар аҫрарға тейеш? Көмөшкә ҡоям. Кеше яллап эш эшләтеү (картуфлыҡ ерен һөрҙөрөү, бәрәңге ултыртыу, бесән эшләү, ҡош-ҡорт еме алдырыу, ҡаҙ өмәһе үткәреү, емерек ҡура-ҡаралтыны йүнәттереү һ.б.) өсөн үҙемдең кәрәк-яраҡҡа ғына ҡайната инем көмөшкәне. Һораусылар булғас, һата ла башланым. Аҡмаһа ла тамып тора. Унан мин бит ағыулы эсемлек һатып ятмайым, көмөшкә - таҙа спирт, шәкәр ҙә сүпрә - бер ниндәй химия ҡушылмай. Ошоғаса көмөшкә эсеп, берәүҙең дә үлеп ятҡаны юҡ әле, тәүбә. Ана Ҡаҙағстан яғынан килтерелгән ағыулы арзан араҡыны тыйһындар, ҡайҙа уға контроль? Таможня, полиция ни ҡарай, ниңә ирекле рәүештә хатта төпкөл ауылға ла килеп етә был ағыу? Күпме кеше ҡырылды шул арзан араҡы һәм "Боярышник" шыйыҡсаһынан? Ә бына көмөшкәгә бәйләнмәгеҙ, ул ауылда аҡса урынына йөрөй, минең башҡаса табыш килтерер шөғөлөм юҡ. Тиҙҙән балалар мәктәп тамамлай, уларҙы уҡытырға кәрәк буласаҡ. Уҡыһындар, минең һымаҡ ауылда аптырап ятмаһындар киләсәктә... Исемемде юрый шулай яҙҙым, башҡа көмөшкәселәр ҙә минең хәлдәлер, тип уйлайым. Беҙ бер кемде лә ағыулағаныбыҙ юҡ. Эш бирегеҙ миңә, эш, шул саҡта бөгөндән көмөшкә аппаратын сүплеккә сығарып ырғытырға ризамын!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Уҙған аҙнала Дәүләт Думаһы алдында отчет биргәндә Хөкүмәт башлығы Дмитрий Медведев пенсияларҙы индексациялау мәсьәләһен күтәреп сыҡты. Эшләмәгән рәсәйҙәрҙең пенсияларын индексациялау власть өсөн өҫтөнлөклө булып ҡала, тип билдәләне Премьер. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә яҡынса 9,6 миллион пенсионер эшләй. 2016 йылдан уларҙың пенсиялары индексацияланмай, тип хәтергә төшөрә баҫма.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев Санкт-Петербургта Рәсәй Закон сығарыусылар советы ултырышында Рәсәйҙә Коррупцияға ҡаршы кодекс булдырыу башланғысы менән сығыш яһаны. "Коррупцияға ҡаршы нормалар ике йөҙҙән ашыу федераль норматив актында бар, төбәк һәм муниципаль хоҡуҡи акттарында уларҙың байтаҡ булыуы хаҡында әйтәһе лә юҡ. Ошо хоҡуҡи документтарҙы бергә тупларға кәрәк", - тигән фекерҙә Константин Толкачев.

✓Өфөлә серәкәйҙәрҙе күпләп ағыулау күҙаллана. Дезинфекциялау үҙәге препараттар һатып алған, белгестәр яҡшы һауа торошон көтә. "Биләмәләрҙе бөжәктәрҙән таҙартыу матдәһе кешеләр һәм хайуандар өсөн дә бөтөнләй зарарһыҙ, әммә ямғыр менән йыуылыуы мөмкин", - тип аңлатты улар. Серәкәйҙәр менән көрәшеүгә республика ҡаҙнаһынан 2,8 миллион һум аҡса бүленгән. 1342 гектар майҙанда ҡала парктарын һәм һыу ятҡылыҡтарын эшкәртеү күҙаллана.

✓Өфө йылғаларында һыу ташыуы дауам итә, әммә ул бер аҙға әкренәйҙе. Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы тәүлек эсендә Ағиҙел йылғаһы 15 сантиметрға күтәрелгән. Дуҫлыҡ монументы эргәһендә йылғаның кимәле 618 сантиметр тәшкил итә. Ҡариҙел йылғаһы ни бары 7 сантиметрға артҡан - 584 сантиметр. Бочкарев ауылы тирәһендә Дим йылғаһының кимәле - 482 сантиметр (+9 см).

✓Опера һәм балет театры янындағы скверҙа төҙөлгән "Ете ҡыҙ" көйлө фонтанын асырға әҙерләйҙәр. Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы хеҙмәткәрҙәре двигателдәр, насостар ҡуя, яҡтыртыу ҡоролмаларын урынлаштыра, скульптураларҙы йыуа. Фонтанды асыу 29 апрелгә билдәләнгән.

✓ Элек "коммунизм" ваҡытындағы иғлан ителгән, әммә тормошҡа ашырыла алмаған "Кеше кешегә - дуҫ, иптәш һәм туған!" тигән лозунг хәҙерге ваҡытта ла тап-таман ғына булып ҡалыр ине лә бит...



КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ЙӨЙҺӨҘ ЕРҘӘ...

## йөй эҙләү кәрәкме?

Беҙҙең ракета дивизияһы полктарының береһенән кискә ҡарай госпиталгә бер һалдатты алып киләләр. Табиптар тикшерә торғас, был егеткә "Ҡорһаҡ тифы" (Брюшной тиф) тигән диагноз ҡуйыла. Әрме мөхитендә бындай сир табылыу осрағы ғәҙәттән тыш хәл булып һанала, әлбиттә. Был сирҙе дауалау - табип-инфекционист эше. Инфекция бүлегендәге махсус изоляторға урынлаштырып, тейешенсә тәғәйенләүҙәр яһағандан һуң, шунда уҡ был табип дивизияның эпидемиологына шылтырата. Эпидемиолог вазифаһын башҡарған медицина майоры И. (әйткәндәй, ул - беҙҙең яҡташ) шунда уҡ, госпиталгә килеп, һалдаттан һорашып, "эпид анамнез" (сирҙең ҡасан һәм ҡайҙан йоҡҡанлығын билдәләү) төҙөй. Иртәгеһен таң менән санитар машинаға ултырып, хәрби ҡаласыҡтан утыҙлап саҡрым арала ятҡан полкка килә һәм подразделениеларҙа әүҙем рәүештә үҙ вазифаһына яраҡлы эш башлай. Тейешенсә дезинфекция, сирле менән контактта булған һалдаттарҙы карантинлау эше һымаҡ саралар ойоштора. Бәхеткә, башҡаса ауырыусылар табылмай. Һалдаттар һәм командирҙар менән "ҡорһаҡ тифы" сире буйынса дәрестәр ҙә үткәрәләр. Бер айҙан һуң карантин режимын туҡтаталар. Минең уйымса, йәғни, ябай табип фекерләүенсә, эш бына ошоноң менән генә тамамланырға тейеш. Әммә оҙаҡламай дивизиялағы әлеге тиф осрағы буйынса часҡа юғарынан фарман килеп төшә: "... Разобраться... Выявить виновного... Наказать... Копию приказа о наказании направить на имя..."

Часта, йәғни госпиталдә өҫтән төшөрөлгән шул бойороҡто үтәү буйынса әүҙем эш башлана. Табиптарҙы (улар һәммәһе лә офицерҙар) "Офицерҙар йыйылышы"на йыялар. Командирҙарҙың нисек тә булһа эпидемиологыбыҙҙан "крайний"ҙы яһарға көйләнгәнлеге көн кеүек асыҡ. Әлеге әйткән яҡташыбыҙ саманан тыш йыуаш, үҙен әллә ни яҡлаша алырлыҡ хәлдә лә түгел. Урыҫ телендә лә бигүк оҫта һөйләшмәй (татар телле мари егете ине). "...Ни өсөн шул көндө үк кис полкка бармай, тик иртәгеһен генә барҙығыҙ, иптәш майор, һәм ни өсөн юғарыға шул көндө кис үк доклад яһаманығыҙ?" - тигәндән башланып киткән һәм



башҡа урынлы-урынһыҙ һорауҙар менән күмәләр яҡташыбыҙҙы. "Ни өсөн полк биләмәһендә тәүлектәр буйы булмай, өйөгөҙгә ҡайтып йөрөнөгөҙ... һеҙ - недобросовестный офицер!.." Бына шундайыраҡ фразалар менән был егетте "утлы табала" ҡыҙҙырҙылар, тағы ла ниндәйҙер "гонаһ"тарын иҫләнеләр. Яҡташымды һис бер урынһыҙ ғәйепләргә тырышҡандарға минең әйтер һүҙем бар ине, әлбиттә. Һүҙ алдым. "...Иптәш И. полкка төнгә ҡарай килеү менән шунда уҡ "ҡорһаҡ тифы" сирен барлыҡҡа килтерә торған бактерияларҙы үлтереп бөтөр инеме ни? Иртәгәһен барғас та бөтә эштәрҙе яйға һалған бит ул, сир артабан таралып китеүгә ҡаршы саралар ҙа ваҡытында күрелгән. Икенсенән, һалдат был сирҙе, отпускыла булып, өйөндә йоҡтороп алып килгән..."- тип яҡташымды яңғыҙым яҡлашыуым һис бер файҙа бирмәне. Һөҙөмтәлә, сығырға тейешле бойороҡ барыбер сыҡты: "... наказать майора медицинской службы И..." Һалдаттарҙың сирләп китеү ихтималлығын да тормошта була торған тәбиғи хәл, тип ҡабул итергә кәрәк ине лә бит. Тик ниңәлер бының өсөн кемгәлер мотлаҡ яза биреү мөһим...

Тағы бер хәл. Ниндәйҙер эш боҙғаны өсөн гарнизон гауптвахтаһында ултырған рядовой Б. һаулығына зарлана башлағас, выводной (уны һаҡлап йөрөргә ҡушылған һалдат) уны госпиталь поликлиникаһына табипҡа алып килә. Килгәс тә, рөхсәт һорап, һалдат туалетҡа инә. Әммә ул артыҡ оҙаҡлағас, выводной бәҙрәфтең ишеген ҡаға башлай. Яуап биреүсе булмағас, ишекте ватып инергә мәжбүр булалар. Арестант һыу торбаһына аҫылынған икән. Әле тәне йылы булыуға ҡарамаҫтан, реанимация саралары файҙа бирмәй... Был осраҡта ла кемделер язаға тарттырыу мотлаҡ кәрәк була. Часть командирҙарын, хатта һис бер ғәйепһеҙ поликлиника начальнигын да аяп тормайҙар. Поликлиникалағы барлыҡ бәҙрәфтәрҙең эстән бикләй торған ишек келәләрен дә алып ташланылар хатта. Шулай итеп, һалдат үлеменең "төп сәбәпселәре"н аҡылға ултырттылар... Әммә, минең фекерләүемсә, был фажиғәнең берҙән-бер ғәйеплеһе - яҡты донъянан иртә туйған егет үҙе бит!

Шулай уҡ, ниндәйҙер хәл тыуыуҙа хатта аныҡ ғәйепле кеше билдәле булған хәлдә лә бәғзе осраҡтарҙа башҡаларҙы "крайний" яһау күренеше ғәжәпләндерә ине. Казармала берәй һалдат икенсеһенең күҙен "күгәртә" һуҡты икән, шул һалдаттың взвод командирынан алып рота, батальон, хатта полк командирҙары һәм тәрбиәселәре (элеккесә - замполит) тейешенсә яза ала. Артабан хеҙмәт буйынса үҫеүҙән мәхрүм булыу, шелтә йәиһә башҡа төрлө язанан ҡотола алмай инде командир барыбер. "... За слабую политико-воспитательную работу среди личного состава подразделения..." Иң ҡыҙығы шунда: хеҙмәттәшен ҡыйырһытҡан хулиган һалдат, бер-ике аҙна гауптвахтала ултырғандан һуң, ваҡыты еткәс, "дембельский" кәпәсен ҡырын кейеп, көлә-көлә өйөнә ҡайтып та китә. Ни өсөн шулай булырға тейешлеген аңламайым. Ун һигеҙ йыл буйы насар тәрбиәләгән өсөн ана шул хулигандың ата-әсәһенә берәй нисек тәьҫир итеү сараһы булһа, бәлки, миңә бер аҙ аңлашылыр ҙа ине...

Минең алҡымымдан алырға маташҡан мәлдәр ҙә булманы түгел. Барыбыҙ белеүебеҙсә, "Киҫкен фарингит" тигән ауырыу бөтә ерҙә киң таралған. Бер аҙ һалҡын алдырып, ошо сиргә юлыҡҡан кеше үҙенең һәр тын алышын наждаклы ҡағыҙ менән тамаҡ эсен сыйғылап йөрөткән һымаҡ итеп тоя. Бындай ауырыуҙа, ғәҙәттә, тән температураһы нормаль була. Студент саҡтарҙа, шул сирҙе эләктереп, табипҡа барһаң, "температураң юҡ бит", тип физкультура дәресенә бармаҫҡа справка бирмәйҙәр ине. "Табип булып алһам, үҙемә ана шундай сир менән мөрәжәғәт иткән һәр кешегә "освобождение" бирер инем", тип хыяллана торғайным. Хәрби табип булып алғас та, бына шул хыялым тормошҡа ашты, әлхәмдүлиллаһ. "Гражданка"ла элек-электән "больничный лист"арҙы кешеләргә табип бирә, йәғни, эш кешеһенә ауырыу буйынса ял биреү фәҡәт врач ҡулында икәне барыбыҙға ла мәғлүм. Ә бына әрмелә табип "... нуждается в освобождении..." тигән справка ғына бирә ине. Йәғни, доктор эштән азат итергә "кәңәш" кенә итә, ә командир шул справкаға таянып, теге йәки был хәрбигә ял бирә. Хатта уны бирмәҫкә лә хоҡуғы бар. Тик, врач кәңәше булғас, ғәҙәттә, бер командир ҙа унын һүҙен йығырға баҙнат итмәй...

- Доктор, - тине мине дивизия штабына саҡыртып алған подполковник дәрәжәһендәге ҙур ғына бер начальник, - офицерҙарға һәм һалдаттарға иң күп "освобождение" биргән табип - һеҙ, тигән сигнал килә часть командирҙарынан...

Ул саҡта мин үҙем дә инде подполковник званиеһында булараҡ, оло начальник алдында ҡапылда "юғалып ҡала" торған йәштә түгел инем.

- Мин бит уларға "освобождение" бирмәйем, ә командирға "рекомендация" ғына бирәм. Әгәр командир теге йәки был хәрбигә күрһәтелгән сир буйынса ял бирмәҫкә баҙнат итә икән - унын хоҡуғында һәм намыҫында. Өҫтәүенә, хәҙер ҡыш көнө, һалдаттар һәм офицерҙар йыш ҡына һалҡын алдыралар. Сөнки командирҙар, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, строевой плацта уларҙы аяҡтарын өшөтөп оҙаҡ тота...

- Һеҙ, доктор, шуның менән башҡалар алдында яҡшы, "добрый" булып күренергә тырышаһығыҙ... Развели тут симулянтов, понимаешь ли, доктора - бездельники!

- Иптәш подполковник, командирҙарҙан айырмалы мин, табип булараҡ, кешеләрҙең тамағын үҙ күҙҙәрем менән күрәм бит. Икенсенән, симулянтты ауырыу кешенән айырыу - минең эш, өсөнсөнән, бөтә кешене лә "симулянт" тип атарға ярамай!

Минең менән артабан һөйләшеүҙең файҙаһы булмағанлығын аңлаған начальник:

- Ярай, барығыҙ, доктор... - тиеүҙән башҡаны әйтә алманы. Бына шулай, кешеләрҙең ауырыуында ла табиптарҙы ғәйепләргә әҙер йөрөгән начальниктар була ул. "Гражданка"ла табип булып әллә ни оҙаҡ эшләргә лә тура килмәгәс, бындай мәсьәләләр нисек хәл ителеүе миңә, әлбиттә, мәғлүм түгел.

Бөтә булған хәл-ваҡиғаларға реаль тормош нескәлектәрен иҫәпкә алып, объектив күҙлектән сығып ҡарап өйрәнһәк, кемдер әйтмешләй "ҡалай һәйбәт булыр ине". Элек "коммунизм" ваҡытындағы иғлан ителгән, әммә тормошҡа ашырыла алмаған "Кеше кешегә - дуҫ, иптәш һәм туған!" тигән лозунг хәҙерге ваҡытта ла тап-таман ғына булып ҡалыр ине лә бит... Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ҡәҙерле яҡташтар?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

**(Аҙағы. Башы 16-сы һанда).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте йортонда сираттағы күп балалы әсәләрҙе бүләкләү тантанаһы үтте һәм тағы ла 42 ҡатын-ҡыҙға "Әсәлек даны" миҙалы тапшырылды. 19 йыл дауамында республикала биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән әсәләр ошондай наградаға лайыҡ була. Ошо ваҡыт эсендә 7134 ҡатын-ҡыҙ миҙал алған.

✓Янғын хәүефе миҙгеле башланыр алдынан республикала урман янғындарын һүндереү буйынса зона уҡыуҙары үтте. Дөйөм алғанда, был уҡыуҙарҙа 100-ҙән ашыу кеше ҡатнашты, 34 берәмек махсус техника йәлеп ителде. Билдәләнеүенсә, урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн административ штраф ҡаралған. Граждандар өсөн - биш мең һумға тиклем, вазифалы кешеләр өсөн - 40 меңгә ҡәҙәр, юридик берәмектәр өсөн - 500 меңгәсә.

✓Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе май байрамдарында почта элемтәһе ойошмаларының пенсия һәм башҡа социаль түләүҙәрҙе таратыу графигын баҫтырып сығарҙы. Пенсия таратыу 2 майҙа башлана һәм ваҡытынан алда тамамлана - 6 майҙа 9-ы өсөн бирелә. Байрам көндәрендә таратыуҙың аныҡ датаһы апрель айы квитанцияларында ла күрһәтелгән.

✓Быйыл Өфөлә навигация осорон 29 апрелдә асыу күҙаллана. Өҙлөкһөҙ эшләү өсөн ҡаланың йылға кисеүҙәре хеҙмәте һигеҙ үҙйөрөшлө һәм биш үҙйөрөшлө булмаған судно әҙерләгән. Караптарҙың техник торошо хәүефһеҙлек талаптарына тулыһынса тап килә. Өҫтәүенә халыҡты ташыу навигациянан алдараҡ башлана. Йылға кисеүҙәре хеҙмәте суднолары кешеләрҙе һыу баҫҡан биләмәләрҙән алып сығасаҡ.

✓26 апрелдән 13 майға тиклем Өфөнән 11 өҫтәмә поезд юлға сыҡты. Был пассажирҙар ағымының артыуына бәйле, тип аңлаттылар "Федераль пассажирҙар компанияһында". 8 майҙа Ульяновск аша "Өфө - Мәскәү" поезы тәғәйенләнгән. Мәскәүгә тағы ла бер поезд Һамар аша бара. 28 апрелдә - көндөҙгө 1-се 20 минутта, Өфөгә 1 һәм 11 майҙа (төнгө 2-гә килеп етә) ҡуҙғала. 4 һәм 8 майға Өфө - Адлер поезы тәғәйенләнә.

✓Өфөлә Шиғриәт урамы барлыҡҡа киләсәк. Яңы урам баш ҡаланың Октябрь районы Нуғай ауылында урынлашҡан. Урамдың оҙонлоғо - 1,3 километр. Ул Есенин урамына параллель рәүештә буласаҡ. Урамға исем биреү мәсьәләһе Өфө ҡала Советы ултырышында хәл ителәсәк.

**"Башинформ"дан.**

✓ Яҡынса иҫәптәр буйынса, "осоусы" таксиҙа юл хаҡы бер саҡрымға 50 һум самаһы тәшкил итәсәк. Ул классик таксиҙағы бизнес-класс тарифынан саҡ ҡына ҡиммәтерәк.



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛАЛЫ ҒАИЛӘЛӘРГӘ

Дәүләт Думаһында өс йәшкә тиклемге сабый тәрбиәләгән өсөн пособие түләүҙе оҙайтырға тәҡдим итәләр. Был хаҡта Хеҙмәт, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эше буйынса комитет депутаты Сергей Вострецов әҙерләгән закон проектына һылтанып, федераль киң мәғлүмәт саралары хәбәр итә. Хәҙер бала ҡараған өсөн айлыҡ пособие йыл ярым ғына түләнә, уның күләме уртаса хеҙмәт хаҡының 40 процентын тәшкил итә. Суммаһы эш хаҡына, йәшәгән төбәккә бәйле. Беренсе балаға пособиеның минималь күләме 2,9 мең һум самаһы, икенсе һәм өсөнсө балалар өсөн - 5,8 мең һум, максималь күләме - 11,6 мең һумға яҡын. Йәш ярымдан алып өс йәшкә тиклемге осорҙа айына 50 һум компенсация түләнә. Эшләүсе әсәләрҙең яртыһынан кәме балаға йәш ярым тулғансы эшкә сыҡмай. Өс йәшлек һәм унан өлкәнерәк балалар өсөн баҡсаларҙа урын алыу мәсьәләһе киҫкен тора, тип билдәләй депутат. Вострецовтың башланғысы балалар баҡсаһында урын етмәгәндәр өсөн билдәләнгән күләмдә пособие түләүҙе күҙ уңында тота. Түләүҙең суммаһы һәр бала өсөн айына өс мең һум тәшкил итеүе ихтимал.

* * *

Башҡортостанда балалар баҡсаһына компенсация алыу өсөн ата-әсәләрҙән справкалар ҡабул итеү башланды. Документы 1 июлгә тиклем мәғариф учреждениеһы урынлашҡан йәиһә ғариза биреүсенең йәшәгән (теркәлгән) урыны буйынса республиканың халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалында (филиалдың бүлексәһендә) алырға мөмкин. Башҡортостан Хөкүмәте Президиумы ултырышында ата-әсәләргә балалар баҡсаһы өсөн компенсациялар тәғәйенләү һәм түләү тәртибен раҫлаған ҡарар ҡабул ителде. Хәбәр ителеүенсә, 1 марттан социаль ярҙамға (беренсе бала өсөн - 20, икенсеһенә - 50, өсөнсөһөнә 70 процент) мохтаждар ғына иҫәп тота ала. Уға ата-әсәнең береһе дәғүә итергә мөмкин. Өҫтәүенә, ғаиләнең килеме һәр кешегә йәшәү минимумынан 1,5 тапҡырға артмаҫҡа тейеш. Әле республикала йәшәү минимумы 8323 һум тәшкил итә. Шулай итеп, компенсация түләүҙәренә һәр ғаилә ағзаһына 12 485 һумдан кәм тура килгән ғаиләләр өмөт итә ала. Инвалидтарға һәм инвалид балаларға; 20 аҙна һәм унан күберәк ауыры булған ҡатындарға; билдәләнгән тәртип буйынса эшһеҙ тип табылғандарға; өс йәшкә тиклем бала ҡарағандарға; 18 йәшкә тиклемге инвалид баланы, I группа инвалидын, 80 йәше тулған оло кешене тәрбиәләгәндәргә; ауыл ерендә йәшәгән күп балалы ғаиләләргә; тулы булмаған күп балалы ғаиләнең бер генә эшкә яраҡлы ағзаһы эшләнә йәки тулы күп балалы ғаиләләрҙең эшкә һәләтле ағзаларынан береһе генә эшләнә йәки уҡыһа, уларға ташлама һала. Үрҙә әйтеп үтелгән граждандарҙың йән башына аҡсалата уртаса килеме иҫәпкә алынмай, ләкин улар үҙҙәренең статусын документ менән раҫларға тейеш, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Башҡортостандың Мәғариф министрлығында.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СИЛӘБЕЛӘР МЕНӘН КҮҘМӘ-КҮҘ



**Башҡортостан делегацияһының Силәбе өлкәһенә рәсми сәфәре барышында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәк губернаторы Борис Дубровский менән осрашты. Унда төбәктәр араһында эшлекле хеҙмәттәшлекте нығытыу мәсьәләләре тикшерелде. Артабан улар төбәктә йәшәгән башҡорт йәмәғәтселеге менән дә осрашып һөйләштеләр.**

- Башҡортостан республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙгә һәр саҡ ярҙам күрһәтә һәм киләсәктә лә быны дауам итергә уйлайбыҙ, - тине Рөстәм Хәмитов. - Беҙ Силәбе өлкәһендәге башҡорт мәктәптәрен дәреслек, методик әсбаптар менән тәьмин итеүҙә, башҡорт теле уҡытыусыларының квалификацияһын күтәреүҙә ярҙам итәбеҙ.

- Силәбе өлкәһендә Башҡортостандан ҡала Рәсәйҙең башҡа төбәктәре менән сағыштырғанда иң күп этник башҡорттар йәшәй. Көньяҡ Уралдағы башҡорт йәмғиәтендә 162 мендән ашыу кеше иҫәпләнә, - тип билдәләне төбәк губернаторы Борис Дубровский. - Башҡа төп милләт вәкилдәре кеүек үк, улар - беҙҙең "алтын фонд".

Көньяҡ Урал башҡорттары 16 милли-мәҙәни ойошмаға берләшкән. Силәбелә милли көрәш секцияһы ойошторолған, төбәк башҡорттарының мираҫын һаҡлауға һәм арттырыуға йүнәлтелгән проекттар ғәмәлгә ашырыла. Әлеге осрашыу барышында Башҡортостан менән берлектә "Балалар һабантуйы" һәм "Илебеҙ батырҙары" проекттарын тормошҡа ашырырға тигән тәҡдим яңғыраны. "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" Эльбрус Ниғмәтуллин республикала "Башҡортостандың иң көслө кешеһе" ярыштарын ойоштороу тәҡдимен индерҙе. Рөстәм Хәмитов был идеяларҙы хупланы. 2014 йылдан Силәбе өлкәһендә "Уралым" милли гәзите, ә 2016 йылдан өлкә телевидениеһында ошо уҡ исемле тапшырыу сыға башланы. Баҫмаһың баш мөхәррире Нурия Иҡсанова был медиапродукттарҙың өлкәләге башҡорт халҡы араһында популяр булыуы хаҡында һөйләне. Шуның менән бергә ул эштең тиҙлеген арттырыу өсөн редакцияға автомобиль кәрәклеген билдәләне. Республика автомобиль һатып алыуҙа һәм студия йыһаздарын яңыртыуҙа тейешле ярҙам күрһәтәсәк, тип белдерҙе Рөстәм Хәмитов. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов башҡорттарҙың мәҙәни мираҫын һаҡлау өсөн "Силәбе өлкәһенең Халыҡтар дуҫлығы йорто" тарихи-мәҙәни үҙәген, шулай уҡ Силәбелә башҡорт гимназия-интернатын асырға тәҡдим итте. Осрашыуҙа Ҡурған һәм Силәбе өлкәләре мөфтөйө Ринат хәҙрәт Раев ҡатнашты. Быйыл Троицкиҙа VI Бөтә Рәсәй Рәсүлев уҡыуҙары һәм өлкә һабантуйы ойошторола, тип билдәләне ул. Борис Дубровский Рөстәм Хәмитовты ошо әһәмиәтле сараларҙа ҡатнашырға саҡырҙы.

# АСЫЛЫКҮЛ БУЙЫНДА - ТУРИЗМ



**Республикалағы иң ҙур күл - Асылыкүл тирәләй туристик-рекреацион кластер булдырыу күҙаллана.**

Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, кластер күлде уратып алған Дәүләкән, Әлшәй, Бәләбәй, Бүздәк районларын берләштерәсәк. Парк-курорт статусы туристарҙың сифатлы ялын тәьмин иткән объекттарҙың булыуын күҙ уңында тота. Улар - турбазалар, кемпингтар, аттракциондар, шифахана. Дәүләкәндә ведомство вәкилдәренең муниципалитет башлыҡтары менән эш кәңәшмәһендә парк-курорт булдырыу мәсьәләһе тикшерелде. "Әлеге ваҡытта республикала туристик биләмәләрҙе үҫтереү кластер йүнәлеше буйынса алып барыла. Әске туризмдың концепцияһына ярашлы, ете туристик-рекреацион кластер билдәләнгән. "Урал легендаһы" Башҡортостандың тау курорттары" кластеры әүҙем үҫешә. Ошо хаҡта килешеү 2016 йылдың июнендә төҙөлгәйне. Быйыл апрель айында "Бөрйән" кластерын үҫтереү тураһындағы документҡа ҡул ҡуйылды", - тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетында.

# СИТТӘРГӘ УҢАЙЛЫҠ ТЫУҘЫРЫЛА



**Күптән түгел Өфө районының Чесноковка ҡасабаһында асылған миграция үҙәге йыл аҙағына көн һайын 500-гә яҡын сит ил гражданын хеҙмәтләндерә аласаҡ.**

Әлеге ваҡытта үҙәктә көнөнә 20 кешене ҡабул итәләр. Бер аҙна эсендә бында 100 самаһы кеше хеҙмәтләндерелгән. Күп функциялы үҙәк ҡарамағындағы ошондай миграция үҙәге Башҡортостан биләмәһендә миграция өлкәһендәге проблемаларҙы комплекслы хәл итеү өсөн булдырылған. Уның эше төбәктә миграция өлкәһендәге хеҙмәттәр күрһәтеү тәртибен ябайлаштырыуға, сит ил вәкилдәренә патент алыу өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыуға булышлыҡ итә. Башҡортостандың Иҡтисади үҫеш министрлығында билдәләүҙәренсә, яңы миграция үҙәге патент алыуға документтар тапшырыу тәртибен күпкә еңеләйткән. Хәҙер бер бинала бөтә тейешле документтарҙы йыйып, ғариза тултырып, шунда уҡ бирергә лә мөмкин. Азербайжан, Тажикстан, Үзбәкстан, Украина, Молдова граждандары эшкә патент алыу мөһим. Патентҡа йәмәғәт тәртибен боҙмаған, судҡа һәм административ яуаплылыҡҡа тартылмаған, Рәсәй биләмәһендә рәсми рәүештә йәшәгән сит ил граждандары эйә була ала. Бынан тыш, улар һау-сәләмәт булырға, рус телен һәм Рәсәй тарихын яҡшы белергә тейеш. Эш биреүселәр ошо патент нигеҙендә сит ил граждандарын өҫтәмә рөхсәт ҡағыҙынан тыш эшкә йәлеп итә ала.

# ОСОП ҠЫНА ЙӨРӨРБӨҘМӨ?



**Өфөләге такси саҡыртыу менән мәшғүл халыҡ-ара компания 2020 йылда "осоусы" таксиҙы һынап ҡарарға ниәтләнеүе хаҡында белдерҙе.**

Компанияның тәүге осоусы аппараттары Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре һәм Америка Ҡушма Штаттары ҡалаларында барлыҡҡа килеүе ихтимал. Һауа аша пассажирҙарҙы ыҡсым фына, вертикаль рәүештә күтәрелә һәм төшә алған осоусы аппараттар ташыясағы күҙаллана. Яҡынса иҫәптәр буйынса, "осоусы" таксиҙа юл хаҡы бер саҡрымға 50 һум самаһы тәшкил итәсәк. Ул классик таксиҙағы бизнес-класс тарифынан саҡ ҡына ҡиммәтерәк. Алдан хәбәр ителгәнсә, "осоусы" такси сифатында Көйөргәҙе районында проектланған һәм етештерелгән бәләкәй габаритлы Rotor-fly ("Ротор-флай") пассажирҙар вертолётын ҡулланырға мөмкин. Ротор-флайҙы уйлап сығарған конструкторҙар уның нигеҙендә шәп оса торған бәләкәй габаритлы вертолёт эшләй. Бының өсөн улар ҡатмарлы мәсьәләне сисә - горизонталь килеш осҡанда вертолёт ҡалаҡтарының боролошо өсөн механизм уйлап сығарыу. Һынауҙар уңышлы үтһә, яңыртылған Rotor-fly горизонталь килеш сәғәтенә 560 саҡрым тиҙлектә оса аласаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Йылдың тәүге өс айында Башҡортостанда 4853 никах теркәлгән. Үткән йылдың ошо уҡ осоронда өйләнешеүселәрҙең һаны 525 парға аҙыраҡ. Өфөлә никахлашыусыларҙың һаны артыуы күҙәтелә. Ағымдағы йылдың өс айында 1613 пар никахҡа ингән, 2016 йылда ошо уҡ ваҡытта 1412 пар өйләнешкән. Быйыл 1162 пар никахтарын тарҡатҡан.

✓Башҡортостандың Милли музейында тәйәгебеҙҙә уҡ атыуҙы үҫтереүҙең күп быуатлыҡ тарихын сағылдырған "Йәйә менән уҡ: мезолиттан алып Яңы осорға тиклем" күргәҙмәһе асылды. Күргәҙмәлә һөйәк, кремний, бронза һәм тимерҙән һһалған уҡ башаҡтарын күрергә мөмкин. Ҡунаҡтарға урта быуаттағы һуғышсы һәм 1813-1814 йылдарҙа рус армияһының сит илдәргә яуҙарында ҡатнашҡан башҡорт яугиры - "төньяҡ амуры"н ҡоралландырыу реконструкцияһы тәҡдим ителә.

✓Өфөлә Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге әҙәби премия лауреаттары билдәләнде. Премияға Мәүлит Ямалетдинов һәм Лира Яҡшыбаева лайыҡ булды. Мәүлит Ямалетдинов - "Ҡуласа" романы, Лира Яҡшыбаева "Халҡыбыҙ изгеләре" китабы өсөн билдәләнгән. Бүләкләү тантанаһы Башҡортостандың Яҙыусылар союзында үтте.

✓Дүртөйлө районының Әсән ауылында урынлашҡан күренекле шағир һәм сәйәси эшмәкәр Шәйехзада Бабич музейы "Бабич" фильмының реквизитын бүләк итеп алды. Ошо көндәрҙә яңы тулы метражлы нәфис фильмдың ижади төркөмө музейҙа булып китте. Музейға режиссер Булат Йосопов "Бабич" фильмында ҡулланылған экспонаттарҙы тапшырҙы.

✓Ф. Гәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең Урал төбәге ҡалалары буйлап гастролдәре уңышлы тамамланды. Коллектив 10 көн буйына Екатеринбургта, Төмәндә, Сорғотта, Нижневартовскиҙа, Ҡурғанда, Силәбелә, Мейәстә, Златоуста концерттар менән сығыш яһаны. Гастролдар Башҡортостандың Урал округындағы рәсми вәкиллеге ярҙамында ойошторолдо.

✓Башҡортостанда балалар баҡсаһына компенсация алыу өсөн ата-әсәләрҙән справка ҡабул итеү башланды. Документы 1 июлгә тиклем мәғариф учреждениеһы урынлашҡан йә иһә ғариза биреүсенең йәшәгән (теркәлгән) урыны буйынса республиканың халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалында (филиалдың бүлексәһендә) алырға мөмкин.

✓ *Милли матбуғат тураһында һүҙ сыҡҡас, гәзит-журналдарҙың тиражы артмауы, йәштәрҙе гәзит уҡыуға йәлеп итеүе ауыр булыуы, улар интернет селтәре аша ғына яңылыҡтар менән танышыуҙы хуп күреүе хаҡында әйтелде.*



БЫУЫНДАР БӘЙЛӘНЕШЕ

# ЖУРНАЛИСТАР МЕНӘН...

## булаcаҡ журналистар осрашты

**Ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт университетында башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты журналистика кафедраһы уҡытыусылары инициативаһы менән ойошторолған Матбуғат фестивале үтте. Сараны асыу тантанаһында БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов, БДУ ректоры Николай Морозкин, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы баш мөхәррире Артем Вәлиев, республика гәзит-журналдары баш мөхәррирҙәре, вуз уҡытыусылары һәм студенттар ҡатнашты.**



Фестивалде асыу тантанаһында журналистика кафедраһы мөдире Рәшиҙә Мәһәҙиева белдереүенсә, Матбуғат фестивале Башҡорт дәүләт университетының журналистика бүлегендә белем алған студенттарҙы киң мәғлүмәт сараларында эшләгән билдәле шәхестәр менән осраштырып, оҫталыҡ дәрестәре һәм фекер алышыу майҙансыҡтарында тәжрибә уртаҡлаштырыу маҡсатында ойошторолдо.

- Журналистика бүлеген тамамлаған студенттар араһында уңышҡа өлгәшкән билдәле шәхестәребеҙ бар, шулай ҙа бындағы уҡытыу кимәле менән бөтәһе лә ҡәнәғәт булмауы тураһында ишетеп беләбеҙ, - тине Рәшиҙә Рәфҡәт ҡыҙы. - Эш биреүселәр бөгөн йәш белгестәргә ниндәй талаптар ҡуйыуын асыҡларға, Рәсәйҙең бөтә юғары уҡыу йорттары өсөн ҙә актуаль булған уҡытыу кимәленә ҡағылышлы мәсьәләләргә лә иғтибар йүнәлтергә тейешбеҙ.

Быға тиклем матбуғат, радио, телевидение өлкәһендә эшләүсе тәжрибәле журналистар вуздың кадрҙар әҙерләү системаһына бер аҙ яңылыҡтар индереү кәрәклеге тураһында үҙ-ара ғына һөйләшһә, ниһайәт, мәсьәләне хәл итеү йәһәтенән фекер алышырға мөмкинлек тыуҙы. Матбуғат фестивале студенттарға ла, уларҙы киләсәктә эшкә саҡырасаҡ ойошмалар өсөн дә бик файҙалы майҙансыҡҡа әүерелде. Фестивалдең тәүге көнөндә "Заман журналисының портреты: мифтар һәм ысынбарлыҡ" темаһына "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев һәм "Молодежная газета"ның баш мөхәррире Ярослава Голобородько етәкселегендә ике фекер алышыу майҙансығы эшләне. Милли матбуғатта эшләргә теләүсе студенттар яҙыусы Марсель Сәлимов, "Шоңҡар" журналы баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин, БДУ уҡытыусылары Рәшиҙә Мәһәҙиева, Фәнил Күзбәков һәм Тимерғәле Килмөхәмәтов, "Өмөт" гәзите баш мөхәррире Рәдис Ноғоманов, "Йәшлек" гәзите баш мөхәррире Артур Дәүләтбәковҡа үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙар бирҙе, бәхәсләште. Милли матбуғат тураһында һүҙ сыҡҡас, гәзит-журналдарҙың тиражы артмауы, йәштәрҙе гәзит уҡыуға йәлеп итеүе ауыр булыуы, улар интернет селтәре аша ғына яңылыҡтар менән танышыуҙы хуп күреүе хаҡында әйтелде. Быға яуап итеп студенттар: "Заман үҙгәргәс, ни өсөн гәзит-журналдар ҙа үҙгәрмәй?" - тиген һорау менән ҡаршы сыҡты. "Гәзит уҡыусыларҙың талаптары үҙгәрә икән, баҫмалар шуға яраҡлашырға, тап килергә тырышырға тейеш. Йәштәр социаль селтәрҙәр аша күп аралаша, шундағы яңылыҡтарҙы даими рәүештә ҡарап бара. Тимәк, гәзит-журналдарға ла шуның менән файҙаланып, үҙҙәренә иғтибар йәлеп итер өсөн социаль селтәрҙәрҙә әүҙемерәк эшләргә кәрәк", - тиген фекерҙә өсөнсө курс студенты Лилиә Ишмуллина. Фекер алышыу аҙағында Азамат Юлдашбаев үҙенең "Журналист тигән һөнәр бармы?" тигән һорауына яуап итеп: "Журналист разведчикка оҡшаған, ә разведчиктарҙы нисек шартлатырға өйрәтмәйҙәр. Уларға шартлатып, тере әйләнеп ҡайтһын өсөн кәрәкле белем биреп, оҫталығын арттырып, әҙерләп сығаралар. Журналист һөнәренә лә шулай уҡыталар, бында һеҙгә тик белем бирелә, артабан ваҡытҡа, ситуацияға ҡарап эш итергә кәрәк", - тигән һығымта яһаны. Ысынлап та, бөгөн Башҡорт дәүләт университетының журналистика бүлегендә уҡыған студенттарға нисек мәҡәлә яҙырға, интервью алырға, камераға нисек төшөрөргә өйрәтмәйҙәр. Уларҙың алдына дөйөм белем кимәлен күтәреү, киң ҡарашлы шәхес, төрлө һөнәр кешеләре менән уртаҡ тел таба алырлыҡ, кешелекле итеп тәрбиәләү маҡсаты ҡуйылған.

Матбуғат фестивале программаһы буйынса фекер алышыу майҙансыҡтарында эш тамамланғас, студенттар оҫталыҡ дәрестәренә йүнәлде. Беренсе курс студенттары "Башҡортостан", "Ҡыҙыл таң", "Республика Башкортостан" гәзиттәре вәкилдәре менән осрашты. Икенсе курс студенттары "Радио России - Башкортостан", "Спутник FM" радиоканалдары етәкселәренә үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙар бирә алды. Өсөнсө курста белем алған йәштәр Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, "Вся Уфа", "Россия-Башкортостан" телеканалдары вәкилдәре менән, дүртенсе курстар "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы һәм төрлө ойошмаларҙың матбуғат үҙәктәренән килгән хеҙмәткәрҙәр менән осрашты. Студенттарға оҡшаған тағы бер сара - вуз ректоры Николай Морозкин менән әңгәмәләшеү булды. Шулай уҡ "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, "Өмөт" гәзитенең баш мөхәррире Рәдис Ноғоманов, "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин үткәргән оҫталыҡ дәрестәре, БР Журналистар Союзы рәйесе Артур Дәүләтбәков менән ойошманың эше тураһында һөйләшеү ҙә бик һөҙөмтәле килеп сыҡты. Өсөнсө курс студенты Заһит Ғүмәров әйтеүенсә, тәүге тапҡыр ғына үткәрелгән Матбуғат фестивале һәр кемгә оҡшаған. "Был сарала киләсәген журналистика менән бәйләргә теләгән, һөнәри үсешкә ынтылған маҡсатлы йәштәрем генә ҡатнашты. Кемдәр һөнәр һайлағанда икеләнеп килгән, диплом алыу өсөн генә уҡып йөрөй - улар бында булманы", - тип тә өҫтәне ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Вуз менән төрлө ойошмалар араһында файҙалы хеҙмәттәшлек булырға тейеш. Беҙ теоретик белем бирһәк, улар йәштәргә тәжрибә тупларға ярҙам итә. Республикаға кәрәкле йәш кадрҙарҙы уртаҡ көстәр менән әҙерләү мөһим булыуына тағы бер инандыҡ", - тигәйне БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты журналистика кафедраһы мөдире Рәшиҙә Мәһәҙиева. Ысынлап та, Матбуғат фестивале оло быуын һәм йәштәр араһында тәжрибә уртаҡлашыр, фекер алышыр өсөн уңайлы майҙансыҡ булып сыҡты. Был күркәм сара киләсәктә юғары уҡыу йортоноң матур бер йолаһына әүерелер, тигән өмөттә ҡалабыҙ.**

Сәриә ҒАРИПОВА.

БАҠСА



# ОЛОН АҠЛАУ

**Апрелдә баҡса ағастарының олонон мотлаҡ аҡларға кәрәк. Был эште ағастар япраҡ яра, ер йылынып, унда ҡоротҡостар уяна башламаҫ борон эшләгеҙ.**

10 литрлы биҙрәгә 2-3 килограмм аҡбур, 500 грамм баҡыр купоросы, 100 грамм казеиндан яһалған елем кәрәк.

Баҡыр купоросын эҫе һыуҙа һәм казеиндан яһалған елемдә иҙәләр, аҡбур өҫтәйҙәр. Килеп сыҡҡан масса ҡуйылығы буйынса ҡаймаҡты хәтерләтергә тейеш.

Уның менән ағастарҙы аҡлап сыҡҡандан һуң, олондар һәм ботаҡтар тәрбиәләрәк күренә. Был состав ямғырҙарға бирешмәй, оҙаҡ тора, баҡыр купоросы ағас олонон яҡшыраҡ зарарһыҙландыра.

# ҺӨЙӘКЛЕ ЕМЕШЛЕЛӘР

**Сейә, сливаға азот, фосфор, калий, ҡайһы саҡта кальций (эзбиз) етешмәй.**

Һөйәкле емешле ағастар өсөн иң файҙалы ашлама булып янған тиҙәк тора. Унда үҫемлектәр өсөн кәрәкле бөтөн элементтар бар. Ағастар күптән ултыртылған булһа, һәр 2-3 йыл һайын ағас төптәренә тиҙәк һалырға кәрәк. Йәш ағастарҙың төбөнә һалмайҙар, ағас олоно тирләй һибәләр. Әгәр ҙә янған тиҙәкте яҙ индерҙегеҙ икән, уның файҙаһы йәйҙең икенсе яртыһында ғына күренә башлаясаҡ, сөнки ул ошо мәлгә генә сереп, таралып бөтә. Ауыр, балсыҡлы тупраҡта тиҙ серегән ат тиҙәге ҡулланыу урынлы.

Органик ашламанан тыш, минераль ашламалар кәрәк. Бигерәк тә азотлы ашламаларҙы иртә яҙ индереү кәрәк. Органик ашламалар фосфорға, калийға ла ярлы, ә улар һөйәкле ағастарға күп кәрәк. Бигерәк тә емешкә төймәләнә башлағас был минералдар менән туҡландырыу файҙалы булыр. Тәүге 2-3 йылда азот етешмәй, шуға ла яҙ ағас төбөн ҡаҙып, һәр 1 кв.м. майҙанға 20-25 грамм аммиаклы селитра йәки 60 грамм көкөрт кислотаһының аммоний тоҙо (сернокислый аммоний) индерергә. Әгәр ҙә янған тиҙәк һалынған икән, күләмде ике тапҡырға кәметергә. 3-4 йәшлек ағастарға азоттан тыш, фосфорлы һәм калийлы ашламалар кәрәк, улар насар ирей, шуға ла көҙөн индерәләр. 1 кв.м. майҙанға - 70-80 грамм суперфосфат, 30-45 грамм 40 процентлы калий тоҙо. Фосфор һәм калийға ҡарабойҙай һабағы көлө, шулай уҡ һалам һәм япраҡлы ағастар көлө бай. Көл сәнәғәт ашламаларына ҡарағанда файҙалыраҡ та, уның составында эзбиз күп, ә ул сейә, сливаға бик кәрәк.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Арыуҙы бөтөрөү

❖ Тигеҙ күләмдә аҡ сәскә, етен орлоғо, ылыҫ алып, 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 л ҡайнар һыу ҡойорға, 15-20 минут төнәтергә. Ванналағы һыуға ошо төнәтмәне, 1 ҡалаҡ диңгеҙ тоҙо өҫтәп, 20 минут һыуҙа ятырға.

## Шифалы май

❖ Кем тире ярылыуҙан, шешенеүҙән, сөйәлдәрҙән йонсой, шифалы май яһап алырға кәрәк. 2 ҡалаҡ кесерткән тамырына 1 стакан үҫемлек майы ҡойорға, 1 минут ҡайнатырға, һыуытырға һәм тирегә һөртергә.

❖ 2 ҡалаҡ шыршы үләненә 1 л ҡайнар һыу ҡойорға, төнәтергә, һыуытырға һәм ваннаға өҫтәргә.

❖ 1-әр ҡалаҡ мышар япрағы, календула сәскәһе, әрем үләне алып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут төнәтергә. Ошо төнәтмәне 1 литр һыуға 1 ҡалаҡ күләмендә алып, 15 минутлыҡ ваннала ятырға.

## Кесерткән

❖ Көндәр йылынһа, кесерткән ашай башларға кәрәк. Уны йәшелсә ашына ла, бутҡаларға ла, салаттарға ла өҫтәйҙәр. Кесерткән гемоглобинды күтәрә, матдәләр алышыныуын көйләй, йөрәк-ҡан тамырҙары ситемаһы эшен яҡшырта. Яңы ғына һығылған кесерткән һуты файҙалы. Уны яртылаш һыу менән иҙеп, көнөнә 3 тапҡыр, 2-3-әр ҡалаҡ эсергә. Был дауа ашҡаҙан тракты эшмәкәрлегенә яҡшы тәьҫир итә, тоҙҙарҙы ҡыуа. Ревматизм менән яфаланыусылар ауыртҡан урындарына кесерткәнде иҙеп һала ала.

## Веналар киңәйеүе

❖ 1 ҡалаҡ ҡомалаҡ тубырсығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут ҡайнап ултырған һауытта тоторға, һөҙөргә һәм эсергә. Гел яңы әҙерләнгән төнәтмә эсергә. Ашарҙан алда көнөнә - 3 тапҡыр. Бынан тыш, ошо уҡ төнәтмәне веналарға һөртергә.

Айбикә ЯҠУПОВА.

***✓ Бына шундай халыҡ-ара шарттарҙа илебеҙ матбуғаты теләһә ниндәй яла һәм бысраҡлыҡтарҙы кире ҡаға алырлыҡ көскә эйә булырға, һалҡын һөжүмгә, терроризм идеологияһын таратыуға ҡаршы тора алырға тейеш.***



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Ата-бабалары тураһында белешмә

Беҙҙең эраның тәүге быуаттарында Ғәрәбстанда Мәккә ҡалаһы барлыҡҡа килә.

Мәккә ҡалаһының тирә-яғы электән үк ҡоролоҡтан яфа сиккән, шуға ла ул ерҙәр игенселек һәм малсылыҡ эштәренә яраҡһыҙ булған тиерлек.

Тик шулай ҙа Мәккә ҡалаһы тиҙ үҫкән, сөнки мөһим карауан юлдарының байтағы унының аша үткән. Ә иң мөһиме, ғәрәп ҡәбиләләренең күпселеге хөрмәт иткән һәм табынған илаһтарҙың изге урындары Мәккәнең үҙендә лә, ҡаланың тирә-яғында ла бик күп булған. Шуның өсөн был яҡтар изге тип танылған, һәм ғәрәптәрҙең төрлө ырыу кешеләре бында үҙ илаһтарына табынырға килгән. Улар менән һатыу итеү, алыш-биреш тә ҡалаға ярайһы уҡ табыш килтереп торған.

Ғәрәптәрҙең иң изге урыны - Ҡибла менән Зәмзәм шишмәһе лә Мәккәлә урынлашҡан. Ғәрәптәрҙең боронғо риүәйәттәре буйынса, Зәмзәм шишмәһе һыуһыҙ интегеп үлер сиккә еткән Исмәғил менән унның әсәһе өсөн Алла тарафынан булдырылған. Исмәғил - төньяҡ ғәрәп ҡәбиләләренең шәжәрәләрен башлап ебәреүсе ата-бабаларының береһе. Ҡибланы иһә Исмәғил менән уның атаһы Ибраһим төҙөгән.

Мәккә ҡалаһы менән оҙаҡ ваҡыт ғәрәптәрҙең джурһум тигән төньяҡ ырыуы идара иткән. Әйтергә кәрәк, Исмәғил, атаһының кәңәше буйынса тәүге ҡатынын айырғас, икенсе тапҡыр джурһум ырыуы башлығының ҡыҙына өйләнә. Шул ҡатын Исмәғилгә ун ике ир бала таба...

Беҙҙең эраның III быуатында джурһум ырыуын Бану Хузаа тигән ырыу ҡысырыҡлап сығарған. Джурһумдар, Мәккәне ҡалдырырға тура килгәнен аңлағас, Ҡибланы емереп, Зәмзәм шишмәһен күмеп ҡуйған. Бану Хузаа ырыуы кешеләре Ҡибланы яңынан төҙөгән.

Исмәғил тоҡомонан булған Аҙнан исемле кеше, Бану Хузаа ырыуы башлығының ҡыҙына өйләнеп, Мәккәлә йәшәргә ҡалған. Аҙнандың ейәненең ейәне, Ҡөрәйш тигән ҡушамат алған Фир исемле кешенән ҡөрәйш тигән ырыу барлыҡҡа килгән. Ҡөрәйш ырыуы бик тиҙ үрсегән һәм көс туплаған һәм ике йөҙ йылдан Фирҙың етенсе быуын тоҡомонан булған Ҡусәй исемле юлбашсы Бану Хузаа ырыуын Мәккәнән ҡыуып сығарған. Был хәл 440-450 йылдарҙа була. Ҡусәй иһә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең бишенсе быуын олатаһы.

Ҡөрәйш ырыуы идара итә башлау менән, Мәккәлә илаһтарҙың һындары ҡырҡа арта, сөнки улар Ҡибланың һәм Ҡибла аша Мәккәнең абруйын көсәйтеү маҡсатында был сәйәсәтте бар көсөн һалып тормошҡа ашырған.

Ҡусәй 480 йылда үлгәндән һуң уның ейәне, абруй ҡаҙанған Хашим, Мәккә ҡалаһының башлығы булып ҡала. Мәккәнең иң ярлы кешеләренә, шулай уҡ, ҡөрәйш ҡәбиләһенә ҡараған тирә-яҡтағы ярлы кешеләргә бушлай ризыҡ таратыуҙы Хашим тәү башлап ебәрә.

(Дауамы бар).

*БЫЛ АЙҘА...*

# СӘСКӘЛЕ МӘЛ ЕМЕШ БИРҺЕН




(Башы 1-се биттә).

Элек беҙ билдәләй торған Матбуғат көнө 1991 йылдан ЮНЕСКО тарафынан нишләптер Бөтөн донъя ирекле матбуғат көнө **(5)** тип үҙгәртелде. Донъя кимәлендә ул иреклелер, әлбиттә. Хатта артыҡ нығ иреклелер. Быныһы инде Рәсәйгә ҡаршы һалҡын һуғыш алып барыусы АҠШ һәм Евросоюздың идеологик ҡоралы - уның матбуғатына ҡағыла. Илебеҙгә ниндәй генә бысраҡ ялалар яғылмай ҙа, уның донъя масштабындағы тарихи роле нисек кенә боҙоп күрһәтелмәй! Ирекле матбуғат урынына был байрам Намыҫлы матбуғат көнө тип төҙәтелһен ине. Бер генә көн булһа ла объектив, ғәҙел хәҡәҡәтте яҙып сыҡһын ине ул донъя матбуғаты! Бындай теләк айырыуса данлы һәм шанлы дата - **9 май** - совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышында Еңеү көнө еткән һайын күңелдә ҡуҙғыта. Ҡыҙғаныска, ҡайһы бер даирәләрҙә матбуғат иреклеген нисек бар - шулай яҙыу тип түгел, ә башына ни килһә, шуны яҙыу, кем түләһә, шуға хеҙмәт итеү тип аңлайҙар, күрәһең. Бына шундай халыҡ-ара шарттарҙа илебеҙ матбуғаты теләһә ниндәй яла һәм бысраҡлыҡтарҙы кире ҡаға алырлыҡ көскә эйә булырға, һалҡын һөжүмгә, терроризм идеологияһын таратыуға ышаныслы рәүештә ҡаршы тора алырға тейеш һымаҡ. Әммә беҙҙең бөгөнгө матбуғатыбыҙ хәле көндән-көн мөшкөлләнә бара. Һәр хәлдә, республика матбуғаты ана шундай хәлдә. "Бөгөн матбуғат ауыр осор кисерә. Ҡасандыр гәзиттәрҙең тираждары 100, 120, 150 мең данаға етә ине. Бөгөн 15 мең тираж йыйыу ҙа һирәк күренеш. Күләм ун тапҡырға кәмегән,- тине был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов 13 апрелдә булып үткән тура бәйләнештә. - Әлбиттә, гәзиттәргә ярҙам итергә кәрәк. Әле беҙ аҙ тәьмин ителгән халыҡты гәзит-журналдарға яҙҙырыу мәсьәләһе тураһында уйланабыҙ". Бирһен Хоҙай, матбуғаттың тотош ил, төбәк етәкселеге сәйәсәтен йәмәғәтселеккә, халыҡ аңына еткереүсе лә, тәрбиәүи бер йоғонтоло сара икәнлеге лә һәр ваҡыт аңлау тапһын ине. Юғиһә, тираж кәмеүенә һылтап, гәзит-журналдар штатын ҡыҫҡартыу, төрлөһөн бергә ҡушып, күбеһенсә айырым шәхестәр мәнфәғәтен ҡуҙәтеүсе "медиавинегрет"ойоштороу , яҙма баҫмаларҙы бюджет ярҙамынан мәхрүм итеү кеүек популяр булмаған "реформа"лар редакцияларҙа бер ҙә генә ижад мөхите тыуҙырмай. Ә инде тираж мәсьәләһенә килгәндә, эшһеҙ, аҡсаһыҙ халыҡта гәзит ҡайғыһы ла китеберәк торалыр шул (гәзитте ашап булмай бит). Ни тиһәң дә, баҫма матбуғат тираждары - ул туранан-тура халҡыбыҙҙың рухи һәм тормош кимәле күрһәткесе икәнен дә оноторға ярамаҫ ине. Бына бит, беҙгә ирек ҡуйһаң, һис туҡталып булмай. Бер тигәс тә, форсаттан файҙаланып, әйтәһе һүҙ ҙә әйтелде - аҙағы хәйерле булһын.

Матбуғат байрамынан һуң Радио көнө **(7)** сиратта тора. Иллә мәгәр радиожурналистарҙың хәлен дә мәҡтанырлыҡ, тип әйтә алмайбыҙҙыр. Ә шулай ҙа матур, ҡыҙыҡлы тапшырыуҙар эшләп, йыр-моңдарыбыҙҙы яңғыратып, уны эфир тулҡындарында ғына түгел, ә беҙҙең күңелдәрҙә лә йәшәтеүсе ижадташтарға уңыштар теләйек.

Еңеү көнө **(9)** айҡанлы һүҙҙе дауам итеп, ваҡыт арауығында ул көн беҙҙән алыҫайған һайын, уның бөйөклөгө, совет халҡының тиңһеҙ ҡаһармандығы, фиҙакәрлеге нығыраҡ һөҙ бара аңыбыҙға, тип әйтке килә. Рәсәйҙә башланып, хәҙер хатта сит илдәрҙә лә солғап алған "Үлемһеҙ полк" акцияһы тап ана шул хаҡта һөйләй ҙә. Был ысын мәғәнәһендә халыҡ ихтыярының, именлек хаҡына уның берҙәмлегенен тетрәндергес бер миҫалы ул. Был акцияның тормош һөйөүсән ҡеүәте бөгөн, халыҡ-ара хәлдәрҙең ҡиҫкенләшкән, хатта ки әленән-әле өсөнсө донъя һуғышы хаҡында фараздар ишетелеп торған мәлдә айырыуса көн үҙәк. Бөгөнгө шарттарҙа "һуғыш" тигән төшөнсәнең тулыһынса мәғәнәһеҙлеген аңларлыҡ ҡына аҡылы барҙыр, моғайын, донъя илдәре башлыҡтарының.

Донъя кимәлендә Халыҡ-ара кендек инәләре (акушерҙар) көнөнөң **(5)**, шулай уҡ Халыҡ-ара әсә **(14)** һәм Халыҡ-ара ғаилә **(15)** көндәренең бер үк мәлдәргә тап килеүе осраҡлы түгелдер: уларға эш күп булһын, сабыйҙар тыуып торһон, донъялар имен булһын.

Халыҡ-ара музейҙар көнө **(18)** айҡанлы бер кәлимә: бөтөн булған яҡшылыҡ, изге ғәмәл һәм ҡаҙаныштар бөгөн фәҡәт музейҙарҙа ғына ҡалып килә һымаҡ булып китмәйме һеҙгә, йәмәғәт? Ығы-зығы, мәңге бөтмәҫ кризис әҙемтәләре, фәҡирлек, ғурылыҡ, енәйәт... Заманыбыҙҙың бөгөнгө көҙгөһө, сағылышы ошо түгелме ни? Шул әлеге музейҙарыбыҙға барып ҡына бөгөнгөнән ваҡытлыса булһа ла арынып торорға, күңел йыуатырға, рух ныҡлығы алырға тура килә. Әйткәндәй, сирек быуат элек кенә әле йәш быуындың, тырышып уҡырға, яҡшы, әҙәпле кешеләр булып үҫергә, өлкәндәргә ихтирам итергә, ярҙамлашырға, ата-әсәңде, иленде, теленде һөйөргә, тигән инаныуҙарын да пионер ойошмаһы тарихынан ғына уҡып белергә була хәҙер. **19 май** - Бөтә Союз пионер ойошмаһы булдырылған көндә (1922 йыл) бөгөнгө балаларға ошо хәрәкәт эшмәкәрлеге тураһында әкиәт итеп булһа ла һөйләргә кәрәктер, сөнки улар маҡсаттарына ныҡышмал ынтылышлы шәхестәр булып, үҙ киләсәгенең фәҡәт үҙ ҡулдарында икәнен белеп үҫергә тейештәр. Улар быуынының бөгөнгө көн билдәләнә башлаған Эшһеҙлектән яҡлау көнөнә **(21)** хәжәттәре төшмәһен өсөн. Май айының ҡояшлы матур иртәһендә - Һуңғы ҡыңғырау байрамында **(25)** уҡыуҙы тамамлаған һәр бала иртәгәне көнөнә ышаныс менән ҡарай алһын өсөн.

Ай ахыры Филологтар көнө **(25)**, Рәсәй эшҡыуарлыҡ көнө **(26)**, Бөтә Рәсәй китапханалар көнө **(27)**, Ил сиге һаҡсылары, Химиктар көндәре **(28)**, Бөтөн донъя тәмәкеһеҙ көн **(31)** менән тамамлана.

**Һабанай юбилярҙары:**

**10 -** Бейеүсе, 1960-1983 йылдарҙа Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле солисы, БАССР-ҙың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Рәшиҙә ТУЙСИНАға** - 75 йәш (1942).

**17 -** Физик, БДУ-ның Физика-техник институты директоры, физика-математика фәндәре докторы, профессор, академик, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Роберт ЯҠШЫБАЕВҡа** - 65 йәш (1952).

**20 -** Философ, Өфө дәүләт авиация техник университетының ижтимағи фәндәр кафедраһы мөдире, философия фәндәре докторы, профессор, академик, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Фәнил ФӘЙЗУЛЛИНға** - 75 йәш (1942).

**26 -** Философ, БДУ-ның философия һәм сәйәсәт кафедраһы мөдире, философия фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Баязит ҒӘЛИМОВҡа** - 75 йәш (1942).

**29 -** Советтар Союзы Геройы **Тәфтизан Миңлеголовтың** (сығышы менән Баймаҡ районынан) тыуыуына - 95 йыл (1922-1943).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

✓ *Халыҡты ла нәҫел коды, гендары һаҡлай. Даими рәүештә яңынан тыуыр өсөн һәр бер халыҡтың тик үҙенең организмына ғына хас ҡан хәтере, нәҫел коды булырға тейеш. Милли тел шулай уҡ халыҡтың генетик аңын тәшкил итә.*



ХӘТЕРКИТАП

**Һәр бер илдең, ҡаланың, ауылдың ҡабатланмаҫ тарихы бар. Тарихты халыҡ үҙе яҙа. Яугирҙары - иҫ киткес батырлыҡтары, дошманды еңеүҙәре, эшлеклеһе - тыныш хеҙмәте, бейеүсеһе - осҡон сәсрәтеп күңелдәрҙә елкетер таланты, йырсы-ҡурайсылары тетрәндергес моңо менән яҙа был тарихты. Сәсәндәре, йыраусылары ошо шәхестәрҙе данлай, маҡтай, телдән-телгә, илдән-илгә халыҡ данын тарата. Әммә ошо данлы ла, шанлы ла тарихыбыҙ аҡ ҡағыҙға төшмәһә, тора-бара онотола, халыҡ хәтеренән юйыла бара. Бөгөнгө һүҙем тыуған еремдең хеҙмәт батырҙары, һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа илебеҙҙе үҫтереү, яңы тормош төҙөү өсөн көндө төнгә ялғап ҡара тирен түккән ауылдаштарым тураһында булыр.**

# ОШОНДАЙ ХЕҘМӘТ ӨЛГӨЛӘРЕ...

## үткәндә генә ҡалдымы?



1947 йыл. Көҙҙән йыйылыштар үткәреп, пландар ҡороп, яңыса эш алымдары булдырыу өҫтөндә ныҡлап уйланған Карл Маркс исемендәге колхоз колхозсылары звенолар төҙөп, эште йәнләндерергә ҡарар итә. 1946 йылда ғына тыуған ауылына колхоз рәйесе итеп ҡайтарылған тынғыһыҙ етәксе Ибраһим Ҡәһәрмән улы Уйылданов был эште башлап йөрөүсе була. Звенолар ойошторолғас, уларға йәш, алдынғы ҡарашлы етәкселәр һайлап ҡуйыла. Бер звеноның етәксеһе итеп комсомолец Насиров Ғиниәт Ғәлиәкбәр улы, икенсе звеноға шулай уҡ йәш кенә булһа ла эштә бешкән, тырыш, егәрле һылыу Үҙәнбаева Нурия Ситдыҡ ҡыҙы һайлана. Нурия Ситдыҡ ҡыҙы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тракторсылар бригадаһы бригадиры булып эшләп, иген үҫтереүҙә байтаҡ тәжрибә туплаған колхозсы. Ғиниәт Насиров та ауыр һуғыш йылдарында бәләкәй генә малай сағынан ир-егеттәр урынына эшләп, таһыллланған, оҫтарған, белемен арттырыуға ла ынтылып торған ныҡышмал егет була.

Йәштәр ихласлап эшкә тотона, алдынғы эш алымдары менән танышыу өсөн ауыл китапханаһына килгән гәзит-журналдарҙы аҡтара, иген сәсеү, уны тәрбиәләп үҫтереү өсөн фән талаптарын өйрәнә. Шулай итеп, ҡыш буйына колхозсылар 40 центнер көл, 3 центнер ҡош тиҙәге йыя. Иртә яҙҙан Аҡҡул буйындағы ужым баҫыуҙарын ашлай, тырмата. Ә инде 25 апрелдән ер һөрөргә төшкән игенселәр 2 майға тиклем сәсеүлектәрҙе һөрөп дискылай, ике ҡат итеп арҡыры-буйға тырмата һәм теҙмә сәскес менән һәр гектарға 1,30 центнер иҫәбенән бойҙай сәсә. Әйтергә кәрәк, һуғыштан һуңғы техника, ират ҡулы, ат көсө етешмәгән был ауыр ваҡыттарҙа ерҙе ошолай эшкәртеп сығыу өсөн бик күп ҡул көсө талап ителә. Колхозсылар таң һарыһынан эшер эшкә төшкәнсә, йәндәре алҡымға килгәнсе эшләп, хеҙмәт батырлығы күрһәтә. Был ваҡытта тракторҙарҙы пускач менән түгел, рукоятканы ҡул менән өйөрөлдөрөп, ут алдыралар. Был эш көс талап итә, шуға ла егет ҡорона етеп килгән малайҙар ярҙам итәләр. Тракторсылар ваҡыт менән иҫәпләшмәй, смена нормаларын арттырып үтәйҙәр. Йәш үҫмерҙәр утын менән эшләгән гусеницалы тракторҙа ут (шурик тип атала) яғыусы булып эшләй, лобогрейкала өлкәндәр менән бергә йөрөй. Йәш ҡатындар сәңгелдәктә ятҡан балаларын яҙғы сәсеү ваҡытында - һыуыҡ станда, бесән, ураҡ мәлендә ҡыуыш ҡалдырып, көндәр буйы эшләй. Аслыҡ-яланғаслыҡтан яфа сигеүҙәрен һөйләп тә килештерерлек түгел. Әммә күптә күргән ауыл халҡы тешен ҡыҫып түҙә.

Күмәкләгән - яу ҡайтарған, ти халыҡ мәҡәле. Күмәкләп дәртләнеп эшләүсе колхозсылар 1947 йылдың йәйендә быуаса күрелмәгән юғары уңыш ала. Тәжрибә баҫыуындағы 11 гектар арыштың һәр гектарынан 184-әр бот, дөйөм майҙандағы 16 гектар арыштың һәр гектарынан 144-әр бот уңыш алына. Бойҙайҙың уңышы 30-ар центнер тәшкил итә. Тап ошо йылда колхозсылар һуғыштан һуң тәүге тапҡыр туйғансы икмәк ашай. Был тиклем игенде күреп өйрәнмәгән халыҡ хеҙмәт хаҡына бирелгән игенде һалырға урын таба алмай аптырана. Һәр кемдең ишек алдына килтереп йөкләп иген ауҙарып китәләр, халыҡта яҡты көнгә өмөт, ышаныс уяна. Карл Маркс исемендәге колхоздың Ярат бригадаһында көҙгөнөн үткәрелгән бригада йыйылышында (бригадиры - Әзмәтов М.Х) звеньевой Ғиниәт Насиров бойҙайҙың һәр гектарынан - 30, арыштан - 31, һолонан 13 центнер уңыш алырға йөкләмә ала. Тағы ла ҙурыраҡ уңыш өсөн көрәш ҡыҙа.

Һаҡмар йылғаһының уңдырышлы туғайҙарында үҫтерелгән мул уңыш өсөн тыныш хеҙмәт көсө түккән колхозсыларға СССР Юғары Советы Президиумы ҡарары менән төрлө кимәлдәге наградалар тапшырыла. Звено етәксеһе Насиров Ғиниәт Ғәлиәкбәр улына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә, Ленин ордены тапшырыла; звено етәксеһе Үҙәнбаева Нурия Ситдыҡ ҡыҙы, колхозсылар Үҙәнбаев Фәтхислам Әхмәтғәле улы, Исчурин Ғүмәр Әбделғәзе улы Ленин орденына лайыҡ була. Колхоз рәйесе Уйылданов Ибраһим Ҡаһарман улы, бригадир Әхмәтов Мөхәмәтхәбиб Хәлфитдин улы, колхозсылар Исчурина Нурия Ғүмәр ҡыҙы, Әхмәтов Әбделхәй Фазулла улы, Мырҙабулатов Сөнғәт Абдрахман улы, Утарбаев Фәтхулла Сабир улы, Мусин Нәбиулла Ғатаулла улы Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Тыныш колхозсы-фронтовиктар Баймөхәмәтов Ғибат Әйүп улы, Ҡарамырҙин Мөхәмәтҡол Рамаҙан улы һәм колхозсы Төхвәтуллина Йәүһәр Ризуан ҡыҙы "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалы менән бүләкләнә. Шулай уҡ алдынғы колхозсылар Азаматова Фатима Мостафа ҡыҙы, Әхмәтова Мәликә Хәлфетдин ҡыҙы, Рысбаева Роза Исхаҡ ҡыҙы, Хушмөхәмәтова Хәбибъямал Таһир ҡыҙы, Юлдашбаев Һөйөндөк Ситдыҡ улы "Хеҙмәт отличиеһы өсөн" миҙалдарына лайыҡ тип табыла.

Бөгөнгө көндә ошо хеҙмәт алдынғыларынан тик берәүһе генә иҫән. Утарбаев Фәтхулла Сабир улы әлеге көндә Иҫке Сибай ауылында йәшәй. Фәтхулла олатайҙың беҙҙең саҡырыуҙы ихлас күңелдән ҡабул итеп, Яратҡа килеп, балалар менән әңгәмәләшеүе үҙе бер тарих, хеҙмәт тәрбиәһе өлгөһө булды. Үҙе иген үҫтергән баҫыуҙарҙан уйҙарында булһа ла урап сығыу, лобогрейкала йөрөүҙәре, көлтә ташыуҙары, бесән сабыу, кәбән һалыуҙары тураһында һөйләгән хөрмәтле ветерандың иҫ киткес хәтеренә, теремеклегенә һоҡланмау мөмкин түгел ине. Бер ҙә зарланманы ул ауыр тормошҡа, ә ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс тарих бәйән итте балаларға. Унан Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғиниәт Насировты күреү генә түгел, уның менән бергә эшләүе тураһында ишетеү уҡыусылар өсөн айырыуса ҡыҙыҡлы булды.

Эйе, ауыр йылдар артта ҡалды. Аллаға шөкөр, хәҙерге ваҡытта мул, тыныс тормошта йәшәйбеҙ. Ошо бәхетле тормош өсөн йәнен-тәнен аямай көрәшкән һуғыш һәм тыл ветерандарын, һуғыштан һуң тыныс тормош ҡороуға йәшлеген, һаулығын сарыф иткән олатай-атайҙарыбыҙҙы, өләсәй-әсәйҙәребеҙҙе оноторға хаҡыбыҙ юҡ. Балаларға, ейән-ейәнсәрҙәргә ошо ҡаһармандар тураһында һөйләп ҡалдырырға тейешбеҙ. Мәҡәләлә исемдәре телгә алынған хеҙмәт батырҙарын улдары-ҡыҙҙары, ейәнейәнсәрҙәре, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары, ауылдаштары, таныш-белештәре ғорурланып иҫкә алһын, артабанғы быуындарҙа ла еткерһен, ошо хеҙмәт алдынғыларына тиңләшергә тырышһын ине тип яҙҙым был мәҡәләне.

**Миләүшә ЮЛДАШБАЕВА,**
**Баймаҡ районы Ярат урта мәктәбе директоры.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### IV бүлек

Башҡорт кешеһе башҡалар менән мөнәсәбәтендә лә тотороҡло, һәр ваҡыт кешегә ярҙамға килергә әҙер тора, һәр ваҡыт азатлыҡҡа, иңгыҙ ҡалырға ынтыла. Яһалма рәүештә тыуҙырылған иҡтисади көрсөк, башҡаларҙан йотолоу яҡындағы киләсәктә башҡортто ер йөҙөнән юҡ итәсәк тиgән күрәҙәләр тормошҡа ашманы. Ашмаясаҡ та. Тарихсылар боронғо дәүерҙә лә башҡорттарҙың башҡа халыҡтар менән аралашып йәшәүе хаҡында дәлилдәр килтерә. Әммә башҡорттоң ныҡлы, тотороҡло характеры һәр саҡта ла еңеүгә алып килгән, башҡалар улар тарафынан йотолған.

Башҡорттар һәр ваҡытта ла этник яҡтан толерантлы булған, улар башҡаларҙы нисек бар, шулай ҡабул итеп, улар менән килешеп йәшәгән. Башҡорттар быуаттар буйынса формалашҡан ҡанундарҙы ситтән килеүсе ҡәбиләләр тейешле кимәлдә, ихтирам менән ҡабул иткән, уларҙы үтәгән. Бөгөн дә күҙәтелә ул ҡағиҙә. Мәҫәлән, Башҡортостандың Тәтешле районында йәшәүсе удмурттарҙың, сыуаштарҙың күбеһе башҡортса иркен һөйләшә, мәктәптә өйрәнә, ҡайһы берҙәре хатта башҡорт фамилияларын алған. Башҡорттар күп быуаттар аша үҙенең боронғо мәҙәниәтен: эпостарын, бәйеттәрен, йырҙарын, ҡурайын, бейеүҙәрен, йолаларын, традицияларын, байрамдарын, ергә мөхәббәтле ҡарашын, азатлыҡҡа ынтылышын алып сығып, хәҙерге заманға килтереп еткергән.

Бөйөк Башҡорт иленең теле төрки булған. XII быуатта йәшәгән бөйөк болғар лингвисы Сөләймән ибн Дауыт әл-Болғари әс-Саҡ сини яҙыуынса, уларҙың күбеһе "сабан - болғар теленең бөшөнәк һәм ҡыпсаҡ диалектынан ҡушылған телдә аралашҡан. Ошо уҡ телдә XIII - XX быуаттың башҡорт шағирҙары һәм мәғрифәтселәре Ҡол Ғәли, Салауат Юлаев, Тажетдин Ялсығол, Мифтахетдин Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов һ.б. ижад иткән.

Юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып, шундай һығымта яһарға була: башҡорт халҡы бөшәнәк диалектындағы төрки-болғар телендә, ә көнкүрештә күберәген "сабан" телендә аралашҡан. Башҡорт ғалимы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев (1841-1907) шулай яҙған: "Татар теле боронғо сығатай һәм истәк (башҡорт) теленән килеп сыҡҡан... Был телдә һөйләшеүселәр үҙҙәрен төркиҙәр тип атай. "Ҡыса Рабғузи", "Әбү-л-Ғәзи", "Бабурнамә" китаптары боронғо башҡорттарҙың ошо телдә һөйләшеүенең иҫбаты булып тора... Сығатай һәм истәк телдәренән сыҡҡан был телдең дөйөм атаһы - "төрки". Бәшәнәктәр, ҡыпсаҡтар, истәктәр һәм сабандар шулай уҡ башҡорт ҡәбиләләре төркөмөнә инә, ә сығатай, күрәһең, татарҙарға ҡарайҙыр. Тимәк, Болғар халҡы, асылда, башҡорт телендә аралашҡан (Ф. Г. Нуретдинов "Нариман тарихы", Ҡаҙан, 2010). Был китап авторы 2015 йылдың 12 июнендә Ҡаҙан ҡалаһының Халыҡтар дуҫлығы йортонда Бөйөк Болғарға арналған конференцияла: "Болғар иленең төп халҡы башҡорттар булған", - тип сығыш яһаны. Урыҫ ғалимы В.С. Орлов: "Нишләп, мәҫәлән, имән мең йылдан һуң да имән булып ҡала?" тип яҙа. Халыҡты ла нәҫел коды, гендары һаҡлай. Даими рәүештә яңынан тыуыр өсөн һәр бер халыҡтың тик үҙенең организмына ғына хас ҡан хәтере, нәҫел коды булырға тейеш. Милли тел шулай уҡ халыҡтың генетик аңын тәшкил итә. Хәҙерге башҡорт ғалимдары үҙ халҡының генетик кодын өйрәнергә тотондо. Улар ҡан составын тикшереп, теге йәки был кешенең ниндәй милләткә ҡарауын билдәләй.

**(Дауамы бар).**

*✓ Эдуард ҡустыбыҙ Р. Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжын тамамланы. Рияз ағайыбыҙ Сургут ҡалаһында үҙенең бейеү коллективын етәкләй. Мин дә Мәскәүҙә "Алтын ай" исемле бейеү коллективы ойоштorҙом.*

# ЙӨҘ ЙЫЛ ЙӘШӘҺЕН

## йәки Мәскәүҙәге милләттәштең

**Бөгөнгө геройыбыҙ тураһында БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Динислам Исҡужин: "Ул тырышһа, бөйөк бейеүсе була торған кеше", - тигәйне. Был һүҙҙәр РФ Милли гвардия ғәскәрҙәренең академик йыр һәм бейеү ансамбле артисы, Мәскәүҙәге "Алтын ай" башҡорт бейеү ансамбле етәксеһе, Баймаҡ районы Урғаҙа ауылында тыуып үҫкән Нәзир Нияз улы БАЙЕГЕТОВҡа адресланған. Күптән түгел "Алтын ай"ҙың ҡатын-ҡыҙҙар ансамбле "Байыҡ" республика телевизион бейеү конкурсында уңышлы сығыш яһап ҡайтты. Ошо сара ваҡытында осрашып әңгәмәләштек тә инде "Алтын ай"ҙың алтындай етәксеһе менән.**

**Нәзир, был әңгәмәгә әҙерләнгән саҡта мин һеҙҙең бейеүселәр ғаиләһендә тыуып үҫеүегеҙ тураһында белдем. Мине иң аптыратҡаны шул булды: һеҙҙең атайығыҙ үҙенең өс улын да бейеүсе итеүгә өлгәшкән. Әйткәндәй, уны, бейеүсе, хореограф Нияз Байегетовты, республикала ла, башҡа төбәктәрҙә лә яҡшы беләләр... "Алтын ай"ҙағы эшегеҙ тураһында һөйләүгә күсер алдынан, тәүҙә атайығыҙ менән әсәйегеҙ тәрбиәһе тураһында һөйләп үтегеҙ әле.**

- Атайым Нияз Муллахмәт улы - Баймаҡ районы Таулыҡай ауылынан, әсәйем Фәрзәнә Миңлеғәзим ҡыҙы - Йомаштан. Атайым Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле эргәһендәге студияла белем алған. Уҡыуын тамамлағас, бейеү сәнғәтен үҫтереү ниәте менән районға ҡайтҡан. Ул оҙаҡ йылдар "Йылайыр" совхоз-техникумында бейеү дәрестәре алып барҙы. Студияла уҡыған сағында ул берәй мәл үҙенең өс уллы булырын, уларҙың өсөһө лә уның юлын һайлап, бейеүсе һөнәрен үҙләштеререн, береһе хатта Ҡытайҙа эшләрен, икенсеһенең үҙенә ҡанат ҡуйған дәүләт ансамблендә хеҙмәт итерен, үҙе етәкләгән коллектив ауылдарҙа концерт ҡуйған саҡта ғаиләһе ағзаларының сәхнә күрке булып бейеп йөрөрөн күҙ алдына килтерҙеме икән? Юҡтыр. Әйткәндәй, 1997 йылда "Ғаилә йылы" уңайынан уҙғарылған "Иң музыкаль ғаилә" район конкурсында ҡатнашып, еңеүсе исеме алып, республика һабантуйында призлы урынға лайыҡ булдыҡ. Ҡытайҙа эшләүсе Эдуард ҡустыбыҙ Р. Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжын тамамланы. Рияз ағайыбыҙ Сургут ҡалаһында үҙенең бейеү коллективын етәкләй. Мин дә Мәскәүҙә "Алтын ай" исемле бейеү коллективы ойоштorҙом.

Үҙемдең ғаилә хәлемә килгәндә, 30 йәшкә еткәнсе буйҙаҡ йөрөнөм. Кәләшем менән Мәскәүҙә 2015 йылдың 11 октябрендә Республика көнөндә таныштыҡ. Былтыр йәй өйләнештек, яңыраҡ Айлин исемле ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Эшем күп ваҡыт һәм көс талап иткәнгә күрә, ғаиләмә етерлек иғтибарымды бүлә лә алмайым. Форсатты файҙаланып, мине аңратҡаным юҡ. Ул өйрәткән хәрәкәттәр нескәлеге, ымишаралар тәрәнлеге күптәрҙе, шул иҫәптән мине лә хайран итә. Мин үҙем был ансамблгә нисек барып эләктемме? Учалы мәҙәниәт һәм сәнғәт училищеһында уҡыған сағымда, тәүге курс аҙағында, беҙҙе Өфөнән килгән ике белгес алдында бейеттеләр. Алдараҡ телгә алған Гүзәл Рәшит ҡыҙы менән Рим Сәлимйән улы Әбделмәнов республика ҡалалары һәм райондары буйлап йөрөп, йәш бейеүселәр һайлай икән. Улар беҙҙең сығышты оҡшатҡан, күрәһең - 2-се курсты тамамлағас, 7 парҙы ансамблгә эшкә саҡыртып алдылар. Училищены ситтән тороп тамамларға тура килде. Легендар хореограф Фәйзи Ғәскәров нигеҙ һалған ансамблдә бейеү мине ныҡ үҫтерҙе. Ансамблдең үҙенә генә хас милли һыҙаттары бар. Фәйзи Әҙеһәм улы һалған бейеүҙәрҙең бөтәһе лә үҙенсәлекле, барыһы ла матур. Улар тамашасыға ла, башҡарыусыға ла әйтеп бөтөргөһөҙ кинәнес бирә торған сәнғәт әҫәрҙәре. Миңә "Гөлнәзирә", "Зарифа" бейеүҙәре айырыуса оҡшай. Ансамблдең йөҙөн билдәләрҙәй башҡа бейеү-

лауы, миңә терәк булыуы өсөн кәләшемә оло рәхмәтемде еткергем килә...

**Белеүемсә, атайығыҙ Нияз Байегетов та, һеҙ ҙә Ф. Ғәскәров "академияһы"н үткәнһегеҙ. Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле мәктәбендә алған һабаҡтарығыҙ тураһында ни әйтерһегеҙ?**

- Был мәктәп Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә лә өлгөләләр рәтендә. Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең ҡатын-ҡыҙҙар репетиторы Гүзәл Рәшит ҡыҙы Әсәҙуллинаны ғына алайыҡ. Уға еткән остазды бер ҡайҙа ла осҙәр ҙә бар. Мәҫәлән, Риф Ғәбитовтың "Еҙ үксәһе" шундайҙар рәтенән. Ансамблдә эшләгән сағымда миңә 17 йәш кенә булғанға күрә, "Еҙ үксә" бейеүен Өфө сәхнәһендә башҡарып өлгөрмәнем, был үкенес әле лә күңелдә өйкәп тора. Әгәр ансамблдә ҡалған булһам, "Еҙ үксә"не барыбер бейер инем...

**Ансамблдән һуңғы тормошоғоҙ тураһында һүҙ алып барғанда һеҙҙән хәрби өлкәне һайлауығыҙҙың төп сәбәптәре тураһында ла ишетке килә... Ниңә хоҡуҡ органдар хеҙмәткәре булырға ҡарар иттегеҙ?**

- Ансамблдең юбилей йылында күрше өлкәләрҙә гастролдәрҙә булдыҡ та, Рәсәйҙең төньяҡ-көнбайыш төбәгенә юлландыҡ. Карелияның Кандопога исемле ҡалаһында 18 йәшемде ҡаршыланым. Санкт-Петербургта дуҫым, коллегам, һәләтле бейеүсе (ансамблгә беҙ уның менән бер ваҡытта килгән инек) Илнур Әйүпов менән тотторҡ та Ленинград хәрби округы йыр һәм бейеү ансамбленә ғариза бирҙек. Комиссия һынауын үтә алған хәлдә, Ватан алдындағы бурысыбыҙҙы ошо коллектив эсендә үтәү мөмкинлеге барлығын белә инек. Бәхеткә күрә, беҙҙе ансамблгә ҡабул иттеләр һәм беҙ ике йыл ошонда хеҙмәт иттек. Тик тәүҙә ике айға мотоуҡсылар часына КМБ үтергә ебәрелдек. Уны үткәс, уҡытыу процесы һәм көн режимы тулыһынса хәрби Устав талаптары буйынса ойошторолған ансамблдә хеҙмәт итә башланыҡ. Сюжетлы бейеүҙәрҙе үҙ иткәс, әйткәндәй, үҙем һалған бейеүҙәрҙе лә сюжетлы итеп ҡорорға тырышам, Ленинград хәрби округы йыр һәм бейеү ансамблендәге хореография миңә айырыуса оҡшаны. Ул ғына ла түгел, айҙар буйы сит илдәрҙә гастролдәрҙә булыу ҙа, атап әйткәндә, Европаны арҡырыға-буйға йөрөп сығыу ҙа ылыҡтырҙы. Шулай ҙа хәрби хеҙмәтемдең аҙағы етә башлағас, Фәйзи Ғәскәров ансамбленә кире ҡайтыу тураһында уйлай башланым. Унда мине көтәләр ине (әйткәндәй, мине унда хәҙер ҙә көтәләр, тип, ғорурлыҡ менән әйтәм). Әммә үҙемде артабан һынап ҡарау теләге тыуған коллективыма ҡайтыу ихтыяжымдан көслөрәк булып сыҡты һәм мин 2008 йылда Мәскәүҙәге РФ Эске Эштәр министрлығының Академик йыр һәм бейеү ансамбленә - хәҙер ул Милли гвардия ғәскәрҙәренең академик йыр һәм бейеү ансамбле тип атала - киттем. Был ансамблдең талаптары Санкт-Петербург ансамбленән күпкә юғарыраҡ булыуын әйтеп тороуҙың кәрәге юҡтыр.

**Матур ғына итеп яңы урында эш башлағас, Мәскәүһынлы Мәсәүҙә башҡорт бейеү коллективын булдырыу тураһында ҡайғыртыуығыҙ беҙҙе сикһеҙ һоҡландыра. Һеҙҙәге тәүәккәллек күптәргә, бәлки, хас та түгелдер. Ҡыҫҡаһы, "Алтын ай"ҙың барлыҡҡа килеү тарихы тураһында ла һөйләп үтһәгеҙ ине.**

- РФ Эске эштәр министрлығының Академик йыр һәм бейеү ансамбленә урынлашып, программаны үҙләштереп, концерттарҙа ҡатнаша башлағас, шуға иғтибар иттем: ил кимәлендәге концерттарҙа, ни сәбәптәндер, төрлө милләт вәкилдәре сығыш яһай, әммә башҡорт мәҙәниәтен күрһәтеүсе кеше юҡ тиерлек. Был хәл мине тамам аптыраштa ҡалдырҙы. 2010 йылда Мәскәүҙәге башҡорт балаларын бейетер өсөн ағай-апайҙарҙан зал һораштыра башланым. Әммә һөҙөмтә булманы. Көндәрҙән бер көндө, 2011 йылдың сентябре ине, бер ял итеү үҙәгенә тренер булып эшкә урынлаштым. Урынлашҡан саҡта етәкселеккә бер генә шартым барлығы тураһында белдерҙем: "Ҡәҙимге көндәрҙә мин Үҙәккә килеүселәр менән, ә ял көнөмдә - үҙемдең уҡыусыларым менән шөғөлләнһәм буламы?" Үҙәктә минең теләгемә ҡаршы килмәнеләр һәм мин Мәскәүҙә йәшәүсе башҡорт балаларын бейеү түңәрәгенә йыйыуым тураһында интернетҡа иғлан ҡуйҙым. Әйткәндәй, тәүге айҙа минең йәкшәмбе түңәрәгемә ағалы-һеңлеле ике баланан башҡа килеүсе булманы. Өмөт ителгән

***НӘЗИР БАЙЕГЕТОВ:***

*Ҡыйынлыҡтар һәр саҡта ла бар инде ул. Эшеңә йөрәгеңде, күңелеңде биреп тотонмаһаң, булмай. Эшемдең файҙаһын, кешеләргә кәрәклегемде күреүҙән үҙемә көс алам. Был өлкәлә юҡҡа эшләмәйем икән, тигән аңлауға киләм.*



**✓ Ҡартәсәйем дә бейеүсе булған. Тимәк, бейеү минең өсөн беҙҙең ғаилә йолаһы, шөғөлө. Бейеү ярҙамында үҙ халҡыңдың мәҙәниәтен сит кешеләргә еңел генә еткереп булғанлыҡтан, ул минең өсөн аралашыу сараһы ла.**



# ИНЕ "АЛТЫН АЙ",

## физаҡәрлеге тураһында

состав йыйылмағас: "Әллә Мәскәүҙә башҡорт бейеүе бер кемгә лә кәрәкмәйме икән? Юҡ менән булып йөрөйөм түгелме?" - тигән икеле, хафалы уйҙар ҙа барлыҡҡа килмәне түгел. Шулай ҙа ул уйҙарҙы ситкә ҡыуып: "Ярай, быға тиклем ялымды нисек үткәрергә белмәй аҙаплана инем, хәҙер ошо ике бала менән шөғөлләнәм бит әле - уларға үҙ мәҙәниәтебеҙҙе өйрәтәм", - тип, үҙ-үҙемде йыуаттым. Рекламаның яҙылмаған ҡануны буйынса, бер ай үтеүгә, ата-әсәләрем "уянды" - мәктәп йәшендәге балалар төркөмө тупланды. Февралдә Мәскәүҙәге төрлө уҡыу йорттарында белем алыусы башҡорт студенттарынан тағы бер төркөм йыйҙым. Ошо төркөмдән хасил булды ла инде әлеге "Алтын ай".

Эшең күренһә, һинә ылыҡыусылар ҙа күбәйә шул. Былтыр сентябрҙә, ата-әсәләр һорауы буйынса, 4 йәшлек балалар төркөмө астым. Йыл ярым элек: "Нәзир, беҙҙе лә өйрәт", - тип, өлкәндәр ҙә тупланды.





Әлбиттә, бейергә теләгән кешеләр, балаларын бейергә өйрәтергә теләгән ата-әсәләр мәсьәләнең бар тәрәнлеген аңлап етмәҫкә лә мөмкиндәр. Шөғөлләнеү өсөн, беренсенән, буш зал кәрәк. Икенсенән, фонограмма эшләтеү ҙә, бейеү һалыу ҙа ваҡыт, көс, сығымдар талап итә. Мин эштән һуң "Алтын ай" коллективы менән генә "йәшәйем". Беренсеһенә, икенсеһенә, өсөнсөһөнә, дүртенсеһенә бейеү һалам, концерт программаһы төҙөйөм. Бар буш ваҡытым ансамблгә китә.

**Эшегеҙҙә тағы ниндәй ҡыйынлыҡтар бар, уларҙы һеҙ ниндәй юлдар менән йырып сығаһығыҙ?**

- Ҡыйынлыҡтар һәр саҡта ла бар инде ул. Эшенә йөрәгеңде, күңелеңде биреп тотонмаһаң, булмай. Эшемдең файҙаһын, кешеләргә кәрәклегемде күреүҙән үҙемә көс алам. Был өлкәлә юҡҡа эшләмәйем икән, тигән аңлауға киләм. Эшем минә матди файҙа килтереүгә ҡарағанда, мин үҙем уға аҡса һалам. Өлкәндәр менән балаларҙың түңәрәктәре түләүле, әммә ул хаҡтар Мәскәү өсөн бик шартлы. Ә студенттар бушлай шөғөлләнә. Студенттарға костюмдарҙы үҙем тектерәм. Ике йыл элек концерт менән Өфөгә килдек. Юл сығымдарын үҙемә ҡапларға тура килде.

Ҡыйынлыҡтарҙы "йотаһың" да, артабан атлайһың инде. Кешенән ярҙам һорайһың. Ҡайһы берәүҙәр, ярҙам итәм, ти ҙә, итмәй, йә итә алмай. Ул ғына ла түгел, баҫсаңа "таш ырғытыусылар" ҙа осрай. Ундай күренештәргә күҙ йомаһың да, башты юғары тотоп, артабан атлайһың. Дөрөҫөн әйткәндә, бик ҡыйын эш ул - үҙ коллективыңды етәкләү...

**Ә хәҙер икенсерәк юҫыҡтағы һорау: нимә ул һеҙҙең өсөн бейеү?**

- Бейеүгә ылыҡыуым атайымдың бейеүҙәрен ҡарауҙан барлыҡҡа килде. Уның әсәһе - ҡартәсәйем дә бейеүсе булған. Тимәк, бейеү минең өсөн беҙҙең ғаилә йолаһы, шөғөлө. Бейеү ярҙамында үҙ халҡыңдың мәҙәниәтен сит кешеләргә еңел генә еткереп булғанлыҡтан, ул минең өсөн аралашыу сараһы ла. Кеше бейеүҙе тиҙерәк аңлай һәм баһалай. Һинең башҡортса йырыңды бик аҙ ғына халыҡ аңлап ҡабул итергә мөмкин. Өсөнсөнән, бейеү - сағыу тамаша. Уны тәү күреүҙән аңлайһың. Мәҙәниәтте лә, костюмдарын да, характерҙы ла, рухты ла... Шуға, үҙеңдең халҡың менән таныштырыуҙың иң уңайлы ысулы ул - бейеү.

**Студенттарҙы бушлай шөғөлләндереүегеҙ ыңғай күренеш тә бит, әммә ул һеҙгә еңел бирелмәйҙер. Был аҙымығыҙҙың сәбәбе нимәлә?**

- Сөнки улар - студенттар. Һин дә, мин дә студент булғанбыҙ. Мин Учалы училищеһында 400 һум стипендияға йәшәнем. Әлбиттә, Мәскәүҙә стипендия ҙурыраҡ. Тәүҙәрәк мин түләүҙе студенттарҙан да ала инем. Ләкин, "ала инем" тейеүем дә шартлы икәненең йәшерен-батырыны юҡ: берәү - түләй, икенсеһе түләй алмай... Шунан, түләү мөмкинлектәре самалы талантларымдың хәленә кереп, дәрестәрҙе бушлай иттем. Бәлки, берәй бағыусы табылыр, тигән өмөт тә бар. Өлкәндәр менән - сәғәт ярым, балалар менән сәғәт ярым шөғөлләнәм. Ә студенттар менән кәмендә 2-3 сәғәт шөғөлләнәм. Ҡайһы берҙә уларҙы төн уртаһына тиклем "илатып" бейетергә тура килә.

Концерт етеп килә икән - талап арта. Студенттарыма үҙемдең көсөмдө лә күберәк бирәмдер, бәлки, шул уҡ ваҡытта уларҙан да күберәкте талап итәм. Шулай бер-беребеҙгә бәйләнгәнбеҙ: мине үҙ коллективымдың "коло" тиһәгеҙ ҙә була.

**Тимәк, һеҙ бейеүсе лә, хореограф та, менеджер ҙа... Бөтөн эштәрҙе лә үҙегеҙ алып бараһығыҙ. Киләсәктә "Алтын ай"ҙы тағы ҡайһы йүнәлештә үҫтереү тураһында уйлайһығыҙ?**

- Һөнәри оҫталыҡ яғынан үҫәбеҙ, тип әйтеп булмай әлегә. Үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр ҙа сәхнәгә менеп ҡарамаған балалар осрай. Уларға сәхнәлә үҙеңде дөрөҫ тотоуҙан башлап, дөрөҫ итеп тыпырҙауға тиклем барыһын да яңынан өйрәтергә тура килә. Ана шулай итеп көс-хәл менән бейеүсе тәрбиәләп алдым ғына тиһәң, бейеүсе ҡыҙ йәки егет уҡыуын тамамлап та ҡуя. Улар урынына яңылары килә. Баяғы бейеү "әлебен" өйрәтеү яңынан башлана. Ҡайһылай ғына тиһәң дә, беҙ был ысынбарлыҡҡа гәйеп ташлай алмайбыҙ. Сөнки был - тормош ҡануны. Ололар - китә, йәштәр килә тора. Иң мөһиме, коллектив йәшәһен, тим.

Ансамбль формаһында булырмы, әллә бөтөнләй икенсе форматтамы - Мәскәүҙәге башҡорт балаларын берләштерер мәҙәни үҙәк эшләргә дәрт иткәнмен. Йәш бара, ваҡыт үҙенекен итә. Беҙ ҙә гел йәш булмаҫбыҙ. Бер мәл үҙебеҙ дер һелкеткән сәхнәләрҙе йәштәргә ҡалдырырбыҙ. Нимәһе генә хафаға һала - беҙҙең кәр китеңкерәгән саҡта, беҙ ҡартайғас, беҙҙең эште дауам итеүселәр булһын ине. Ансамбль 100 йыл йәшәһен ине. Бының өсөн уның нигеҙе ныҡлы булырға тейеш. Мин бөгөн студенттарҙы "тәрбиәләй-тәрбиәләй", ошо нигеҙҙе "төйөү" менән дә шөғөлләнәмдер, бәлки. Бәлки, етерлек итеп төйөрлөк мөмкинлегем дә юҡтыр. Һәр хәлдә, беҙ Мәскәүҙә үҙ хәлебеҙҙән килгәнсә халҡыбыҙҙың лайыҡлы вәкилдәре булырға тырышабыҙ. Төп маҡсат - баш ҡалалағы милләттәштәрҙе бер-береһе менән таныштырыу, аралаштырыу. Ҡалала башҡорт мөхите бик-бик тар булыуы бер кемгә лә сер түгел. Мәктәптә рус телендә уҡыталар икәнлеге лә ғәҙәти. Шулай ҙа нимәһе ҡыуандыра: шундай ҙур "иләүҙә" ҡайһы бер милләттәштәр балаларын милли тамырҙарыбыҙ - телебеҙ, моңобоҙ, еребеҙ, тарихыбыҙ солғанышында тәрбиәләргә тырыша. Беҙгә тулҡын-тулҡын булып балалар килә икән, был да Мәскәү башҡорттарының әүҙемлеге, гәме, сәме барлығы тураһында һөйләп, беҙҙең һүҙҙе дәлилләп тора. Мәскәүҙә тыуып үҫкән башҡорт балаларының барыһы ла туған телде һыу һымаҡ эсмәй. Башҡортса һөйләшергә оялған балалар ҙа осрап ҡуя. Ундайҙарға мин бейегән саҡта әйтелә торған таҡмаҡ ятлатам. Һәм улар күмәк сығыш ваҡытында матур итеп башҡортса таҡмаҡтар әйтә. Репетициялар мәлендә лә мин уларға башҡортса һорауҙар бирәм.

**Мәскәү - төрлө милләт кешеләренең бергә йәшәгән урыны. Ошо оркестрҙа башҡорт халҡының үҙ көйө, үҙ моңо бар. Ошо моңдоң бер өлөшө - "Алтын ай". Мәскәүҙәге башҡорт мөхитенең киләсәге өмөтләмө? Әллә ул һеҙҙең һымаҡ энтузиастарға ғына бәйлеме?**

- Һорау ауыр. Мин белмәйем. Әле йәштәргә эйәреп, өлкәндәр ҙә әүҙемләште. Эш беҙҙең энтузиазм менән генә бөтмәҫ, тип өмөт итәбеҙ инде. Беҙҙән һуң шундай уҡ кешеләр ҡалыр, тибеҙ. Ундай энтузиастар Башҡортостандан килергә тейеш. Сөнки рухлы кешеләр Мәскәүҙә, йә башҡа эре ҡалала тәрбиәләнмәй. Телен, республикаһын яратҡан, милли мөхит һағында тороусылар бары тик ауылда тәрбиәләнә, минеңсә.

Бер тапшырыуҙа Рәсәйҙәге иң төп бейеү ансамблен төҙөгән Игорь Моисеевҡа: "Ни өсөн һеҙ үҙегеҙгә алмаш әҙерләмәнегеҙ?" - тигән һорау бирҙеләр. Ул: "Мин үҙемә алмаш әҙерләй аламмы ни? Был бит минән тормай. Пушкин үҙенән һуң икенсе Пушкинды ҡалдырғанмы? Йәки, Достоевский - икенсе Достоевскийҙы ҡалдырғанмы?" - тине. Был һорауға яуапты Игорь Моисеевса бирер инем. Кешене үҫтереү мөмкин түгел. Ул үҙе йәшәй-йәшәй ниндәйҙер аңлауға килергә, үҙен был ерҙә табырға, маҡсаттарына ирешергә тейеш. "Һин минә оҡшайһың. Әйҙә, һин минән һуң эшемде дауам итерһең", - тип хәл итергә ярамай. Ундай кеше ҡалыр ҙа, ҡыйынлыҡтар килгәс, ташлаясаҡ бит. Эшкә кеше үҙе аңлап килергә тейеш.

**Беҙҙең рубриканың исеме - "Заман башҡорто". Бөгөнгө заман башҡорто ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш тип уйлайһығыҙ?**

- Беҙҙең өлкә буйынса ҡараһаң, иң тәүҙә һин үҙеңдең халҡыңды яратырға тейешһең. Һин башҡорт булып тыуғанһың, тимәк, тамырҙарыңды, ата-бабалар тарихын белергә тейешһең. Башҡорттарҙың тарихы данлы ла, шанлы ла. Ата-бабаларыбыҙ тыуған ерен, азатлығын һаҡлап, үҙҙәрен ҡорбан иткән. Бөгөн үҙеңде ҡорбан итергә кәрәкмәйҙер - ваҡытыңды файҙалы эшкә бүлә алһаң, шул да етә. Мәҫәлән, бейеүсеһең икән - башҡортто бейеү менән таныт, рәссамһың икән - башҡорттар тураһында, республика тураһында рәсемдәр эшлә. Мәскәүҙә башҡорттар тураһында БРИКС һәм ШОС үткәс кенә ныҡыраҡ белеп ҡалдылар. Минән: "Нәзир, Өфөлә кем атта ултыра ул? Ул кемдең һәйкәле?" - тип һорайҙар. Мин аңлатып бирәм: Салауат Юлаев - башҡорт халҡының милли геройы, шағир.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Нәзир Нияз улы Байегетов менән әңгәмәнән үҙемә бихисап файҙалы кәңәш алдым. Ә иң иҫтә ҡалғаны шул булды: геройыбыҙ "Был эш менән бер кем дә шөғөлләнмәй - башҡорт мәҙәниәтен Мәскәүҙә бер кем дә күрһәтмәй бит", - тип туҡталып ҡалмаған, ә үҙенә: "Ни өсөн шулай? Мин был хәлде нисек ыңғай яҡҡа үҙгәртә алам?" - тигән һорау ҡуйған. Үҙебеҙгә үҙебеҙ урынлы һорауҙар ҡуяйыҡ. Һоранып йәшәмәйек - һорауҙар бирә-бирә йәшәйек! Әйткәндәй, 29 апрелдә Өфөлә Йәштәр һарайында "Алтын ай"ҙың шәп концерты үтәсәк. Башлана 17:00 сәғәттә. Инеү бушлай.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ
әңгәмәләште.

*✓ Аңламаҫһың был ҡатын-ҡыҙҙы, көнө килһә, уларға матурлыҡ та, батырлыҡ та, хатта йәмһеҙлек тә һан түгел, әллә ниндәй, үҙҙәренә генә билдәле, йәшерен ҡылдарын сиртеп ебәрерҙәй тулҡын тойорға тейештәр микән…*



Тик теге ерән нығыш булып сыҡты. Ул ҡыҙҙы йыйылыштан һуң ойошторолған уйында ла эҙәрлекләне, бейей белһә-белмәһә лә һикерәнләй-һикерәнләй түңәрәккә баҫты ла, Хәтирәнең ҡулын ҡыҫа биреп тоторға, парлашҡанда биленән эләктереп алырға самаланы. Ҡыҙ иһә был йәштәр араһында алаҡанлап йөрөгән әҙәмде бер ҙә егет итеп түгел, ә бары тик райондан килгән етәксе итеп кенә ҡабул итә. Етмәһә, йәше лә утыҙҙан кәм түгелдер. Шунлыҡтан, Ғимрандың артығыраҡ ҡыланғанын аңғарһа ла, башҡаларҙы ҡыуған кеүек, борхолдатып әрләп кенә ебәрә алмай. Быларға өҫтәп, түрәлеге лә, ҡайҙандыр сит өлкәнән саҡыртып алынған район колхоздарының берҙән-бер зоотехнигы булыуы, комсомол эштәрендә лә әүҙем ҡатнашыуы, нисек кенә булғанда ла, хөрмәт уята. Оҙатып килгән Сәғитенең район түрәһенең ҡыланышына ризаһыҙлыҡ белдереп һөйләнеүенә лә ул ошоларҙы дәлилгә килтерҙе, ҡала кешеһе булып, ауыл ғәҙәттәрен белмәһә, үҙенсә шулай уйнайҙар, тип уйлағандыр инде, тип йыуатты һөйгәнен. Сәғит шулай ҙа ҡәнәғәтһеҙ ҡалды.

Нигеҙле булып сыҡты Сәғиттең һүҙҙәре... Үкенескә ҡаршы... Ноябрь байрамы алдынан комсомол етәкселәрен район үҙәгенә йыйҙылар, бик шау-шыулы йыйылыш булды. Һәр ауылдың йәштәре бөтөн ғәм алдында отчет бирҙе, түрәләрҙең кәңәшен тыңланы, әрләнгәндәр ҙә, маҡталғандар ҙа булды. Әлеге Ғимран Ғәлимович Хәтирәне район етәкселәре алдында бик ололап ташланы, уның етәкселегендәге комсомолдарҙың ниндәй эштәр башҡарыуын һанап үтте, башҡаларға үрнәк итеп ҡуйҙы. Бик ҡыуанды быға Хәтирә, хатта был йәмһеҙ кеше лә уға хәҙер нисектер һөйкөмлө булып күренде. Шунлыҡтан, йыйылыштан һуң Ғимрандың комсомол эштәрен тағы ла йәнләндереп ебәреү өсөн Өфөнән алып ҡайтҡан бик файҙалы ҡағыҙҙарын башҡаларға түгел, ә тап уға ғына бирергә теләгәнен ишеткәс, түбәһе күккә тейҙе. "Яңы методика менән эште яйға һала алһаң, һине бында - районға ла алырбыҙ, беҙгә һинең кеүек тырыштар кәрәк", тип ебәреүе лә утҡа май ғына өҫтәне.

Яңғыҙаҡ ирҙең эшселәр барагындағы бүлмәһенә эйәреп барыу ҙа, ҡыҫтап-ҡыҫтап сәйгә ултыртыуына күнеү ҙә бер ни кеүек түгел ине, инде хушлашырға тип тороп баҫҡан ҡыҙға яҡын уҡ килеп:

- Хәтирә, аппагым, ник күрмәйсен, син тип жан атам бит, - тип һалмаһа егет.

Ҡыҙ телһеҙ ҡалды. Унан, әйтелгәндәр башына барып еткәс, шаталаҡлығына барып, пырхылдап көлөп ебәрҙе. Ах, шул ваҡыт көлмәһә, саялығына барып, уҫал һөйләшһә йәки этәреп кенә сығып китһә икән. Тик көлдө шул, һене ҡатып, эскерһеҙ көлдө. Ә егет быны үҙенсә аңланымы, ризалыҡ тип ҡабул иттеме, турғайға ташланған ҡарсыға кеүек, ҡорбанына ташланды. Былдай көтөлмәгән һәм әшәке һөжүмдән шаңҡыған ҡыҙ хатта ихласлап ҡаршылаша ла, ауыҙ тултырып ҡысҡыра ла алманы...

...Шул уҡ йомала Хәтирәгә район түрәһенән яусы килде. Әсәһен шаңҡытып, атаһын ҡыуандырып, риза булды ҡыҙ. Ҡырҙа мал ҡышлатыуҙа ятҡан Сәғит белмәй ҙә ҡалды. Ауылда Хәтирәнең ҙур түрәгә кәләш булыуын бер мәртәбә, дан итеп һөйләп алдылар.

тыны булыуын һәм шул кимәлгә торошло икәнлеген иҫкәртеүҙе кәрәк тапты. Йәнәһе, ундай ғишыҡ-мишыҡ бала-сағалыҡ, йәшлек мауығыуы ғына булған, хәҙер ул оло тормош кешеһе. Ә шул ваҡытта үҙенең йөрәге тибеүҙән туҡтап торғандай булды.

Йәш ҡатыны менән ғорурланды, маһайҙы Ғимран. Оҙон үңәсле үҫмерлек ҡоронда ла, ҡолғалай һуйҙайып бөгөлә биреп, оҙонлоғонан һәр ваҡыт салбар балағы ҡыҫҡа булып күренеп йөрөгән студент йылған кеше һәм, моғайын, бер ваҡытта ла белмәҫ тә. Уларҙың ғаилә булыуы ла түшәк бүлешеүҙән һәм эш хаҡында һөйләшеүҙән уҙмай. Хатта бер-беренә тура ҡарамай ҙа бит улар. Икеһе лә нимәгәлер уңайһыҙлыҡ кисергәндәй, ҡараштарын йәшереп өйрәнгән һәм был халәт уларҙың ғәҙәтенә инеп киткән.

Бик йәлләй ҡыҙын Сәғиҙә. Ошо хәлен, тойғоларын, кисерештәрен үҙе аша үткәргәндәй булып йөрөй. Йә инде, ҡыҙы ла шул бер яҙмышты ҡабат-



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# БЕТЕРӘ ШАРШЫҺЫ

Повесть

## Яҙмыш

Шундай замандар ине. Эшләнеләр. Емертеп, ал-ял белмәй, төн йоҡоларын ҡалдырып эшләнеләр. Эштән йәм, тәм таптылар. Ә иң мөһиме, уларҙы шул эшләгән, башҡарған эштәре өсөн хөрмәт иттеләр, яраттылар, ҙурланылар бит.

Хәтирә район үҙәгендә лә комсомол ойошмаһын етәкләне. Был вазифаны уға ире түрә булғаны өсөн түгел, ә үҙенең ялҡын теленән ысҡынып киткән осҡон ише янып-баҙлап йөрөүенән йөкмәттеләр. Арыу-талыуҙы белмәй йәштәрҙең йә йыйылышын, йә концертын, йә хеҙмәтен ойошторҙо ул, берәүһенә ятаҡ, икенсеһенә эш урыны йүнләште, берәүҙәрҙең ғаилә ыҙғышын тикшерҙе, икенселәрҙең никахына шаһитлыҡ ҡылды, берәүҙәрҙең ҡайғыһын, икенселәрҙең шатлығын бүлеште. Йәштәр уны үҙҙәренең етәксеһе итеп ҡабул итте, һүҙенә ҡолаҡ һалды, кәңәштәрен тотто. Шулай һәр бере күҙ терәп торған кеше нисек итеп "яратмаған кешем менән йәшәйем" тип йәш түгеп ултырһын йәки моңайып, һағышланып йөрөй алһын. Юҡ, әлбиттә. Йөрәген тишеп сығып бөрөгә тулышҡан хистәрен төбөнән йолҡоп уҡ ташлай алмаһа ла, уларҙы ете йоҙаҡҡа бикләп, мәңгелек ҡараңғы зинданда һарғайып кибеүгә дусар итте. Һис кенә лә күҙ алдынан китергә теләмәгән шаян ҡарашлы һөйөклө йөҙҙө нисек тә күңеленән юйып ташларға, хәтерләмәҫкә, тиҫбе тартҡандағы кеүек исемен ҡабатлап йөрөмәҫкә тырышты. Шунлыҡтан, ауылдан килгән әхирәттәре менән дә бер ваҡытта ла уның хаҡында һөйләшмәне, тегеләре егеттең ҡара яныуы хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡанда үҙенең етәксе, түрә ҡадарында ла һәм хатта инде дипломлы белгес булып төрлө райондарҙа эшләгәндә лә ҡатын-ҡыҙ иғтибарынан һәр ваҡыт ситтә ҡала килә ине ул. Яҡынайтманы уны гүзәл зат нишләптер, күҙ һалғандары моронон күтәрҙе, хат тапшырғандары яуап бирмәне. Хатта берәүгә яусы ла ебәреп ҡарағайны, тегенеһе бала менән тол ҡалып ултырыуына ҡарамаҫтан, йөҙ сәбәп тапҡан булып, тәҡдимен кире ҡаҡты. Ғилләә нимәлә булғандыр инде? Уйлап ҡараһаң, шау шаҙра, сөгөн төбөнән дә ҡарасманыраҡ, сатан-сулаҡ ир-егеттәр ҙә бынамын ҡатындарға хужа булып, бала-саға үрсетеп йәшәп яталар бит. Аңламаҫһың был ҡатын-ҡыҙҙы, көнө килһә, уларға матурлыҡ та, батырлыҡ та, хатта йәмһеҙлек тә һан түгел, әллә ниндәй, үҙҙәренә генә билдәле, йәшерен ҡылдарын сиртеп ебәрерҙәй тулҡын тойорға тейештәр микән...

Хәтирәне башта күргәндә ул, ошо ҡыҙ ҡатыным булыр, тигән уйҙы, әлбиттә, башына ла килтерә алмай ине. Һауалағы торнаға ымһына алмаған кеүек. Бары йәшлек дәрте аңҡытып, сәсеп, күҙҙәре тонйорап көлөп торған, үҙе терегемөштәй етеҙ, осҡор ҡыҙға тын да ала алмай тексәйеп тороуҙан үтә алманы. Аҙаҡ ниндәйҙер кимәлдә бергә эшләргә тура килде. Ҡарт егет йәш ҡыҙҙың үтә лә бер ҡатлылығын, хәйләһеҙлеген, ауыл балаһына хас артыҡ ышаныусанлығын шунда уҡ аңғарып алды. Баш тарта алмай ине ул быудай затлы бүләктән. Юҡ, бер ни хаҡҡа ла...

Әле бына ҡатыны булғас, барын да тейешенсә ҡабул иткән, күнгән кеүек йөрөй. Күп ҡатын-ҡыҙ кеүек, яҙмышына буйһоноуымы, әллә... Әллә Ғимранды ире итеп тартыуымы? Быларын белмәй ир булмай. Тота килеп йән дә, тән дә тармаған әҙәм ҡуйынына инсәле. Үҙе ултырып ҡалыуҙан ҡурҡып шулай итһә, Хәтирәһе нимәнән ҡурҡты - ояттанмы? Ысынында, икеһен дә ҡатын-ҡыҙ күндәмлеге сараһыҙ итте инде. Үҙе һуң, ултырып ҡалһа ней булған да, ҡыҙы кейәүгә сығыуҙан баш тартһа, ней булмаған? Юҡ шул, улар шулай ояттан да, ҡурҡыуҙан да ир артына йәшеренеп өйрәнгән, унда улар йәшен йотоп, ҡанын ялаһа ла ҡурсыулы, яҡлаулы тоя үҙҙәрен.

Ирҙә булған ҡыҙҙарына ата-әсәнең йыш йөрөү ғәҙәте юҡ был яҡтарҙа. Быны ерле халыҡ өнәмәй. Килен булған ҡыҙ ҙа ата тупһаһына, бер ауылда көнитмеш булып та, бик һағындырып ҡына баҫа. Ҡанун ҡоло булған Сәғиҙә был тәртиптән ситләшә аламы инде. Хәтирәһенең донъяһын барып күреүгә зар-интизар булһа ла, өсөнсө айын тултырып, саҡ ҡуҙғалды. Унда ла бер-ике көн алдан күрше-тирәһенә "Кейәү килмәйһегеҙ ти ҙә ҡала, ней заман торалар, ишек бауҙарының нинәмәнән икәнен дә белмәйем", - тип аҡланды әле. Ярай бабайы барып бураларын бурашты, күтәреште, һыңар һыйырҙарын ҡайғыртып, бесәнен дә тейәп апарҙы. Ысынында, кейәүҙәре лә саҡырмай тормай, теге юлы һуғылғанында ла ҡыҙынан "килеп етһен" тигән сәләм ҡалдырып китте. Был ике ауыҙ һүҙҙең эсендә күпме һағыш һәм зар барлығын тойманымы ни әсә күңеле.

Әле ҡыҙының аш-һыу араһында сымыры ғына ҡыбырлап йөрөгәнен күҙәтеп ултырған көнө. Килеп төшкәс тә ай йөҙлө, тығыҙ тәнле балаһының яңаҡтары тартылып, ҡобараһы осҡандай ағарып ябыҡҡан, хатта нисектер моңһоуланып ҡалған төҫ-ҡиәфәтенән бер аҙ шаңҡып торҙо ла, сеңләп кенә илап ебәргәйне. Бабайы булһа: "Дыу-у! Мәрйә ғошап олоп. Мынауынан!" - тип киҙәнә биреп екереп тә ебәргән булыр ине. Бәхетенә, дилбегәне үҙенә генә тотторған. Тупһаға ултырып ҡосаҡлашып илап, күңелдәрен бушатҡас, инеп, сәйгә күстеләр. Сәғиҙә һаман һыҡтай-көлә хәбәрен теҙҙе. Әленән-әле сәйен яңырттырҙы ла, ебеп киткән танауын, тирҙән һәм йәштән сыланған күҙ төптәрен һөлгө таҫтамалға һөрттө. Ҡыҙын күреп танһығы ҡанмай, һағыштан һарғайып барғандай төҫөнә ҡарап, үҙәге өҙөлә лә, сынъяһау итеп донъя көтөп ятҡанына һөйөнә бер яҡтан. Әллә балаһы булһа, әүерәү булмаҫ инеме икән, тип тә уйлай. Уйлап ҡына тормай инде Сәғиҙә.

- Буйыңда бар мәллә, бигерәк һурылғанһың?

- Ю-у-уҡ! - тип ҡырҡа башын сайҡай ҡыҙы, әйтерһең, бер ярамаған нәмә һорай.

- Буһа-булыр ҙа, орлоғо Бохарала түгел дәһә, - тип ныҡыша әсә. Хәтирә һүҙҙе икенсегә бора һала:

- Атай нисек?

- Биреште әле ул атаң быйыл, ҡуҙғалыуы ауырайҙы сәпсим. Улай-былай булып ҡуйһа, мал да аҫырап булмаҫ микән тип ҡуям.

- Китсәле, атайға ни булһын, - тип быудай хәлгә ышанмаҫҡа итә Хәтирә.

- Атаң ғүмере лә арҡыры ағасҡа бәйләп ҡуйылмаған. Яман күҙе менән яман һүҙе лә, суҡмар йоҙороғо ғына ҡалған инде, уларын үлем түшәгендә лә атып ятыр ул, - Сәғиҙәгә бабайына зарланып алыуға форсат сыҡты. - Ней, Рәхимйән ситтә төпләнде, ҡайтһа ла, һалдат булып өйрәнгән әҙәм мал араһында толҡа тапмаҫ.

Уйламаҫтан, әллә ҡайҙа ятҡан ҡаланан төпкөлгә килеп, малайҙарҙың сәләмәтлектәрен, яҙыу-һыҙыуын тикшереп, хәрби училищеға йыйып алып киткәйнеләр бер йылы. Кинйәләре Рәхимйән дә эләкте шунда. Аптырашып ҡалған ата-әсәһен военком үҙе өгөтләп күндереп, улдарын сығарып ебәргәйнеләр ун дүрт йәшендә, шунан алып ҡойроғон тотторғаны юҡ. Уҡыуын тамамлағайны, әллә ҡайҙағы ер сигенә хеҙмәткә ебәрҙеләр, яҙған хаттары ла ай тултырып саҡ урап килә. "Ул һөкүмәт балаһынан ней минауат", тип көрһөнә хәҙер Сәғиҙә.

Уның тураһында ла, башҡаһы хаҡында ла ҡояш һарҡыуға ауышҡансы һөйләшеп ултырҙылар әсәле-ҡыҙлы. Унан Сәғиҙә "мал килгәнсе ҡайта һалайым, атаң быҙау-һыйыр менән маҙаланып йөрөмәҫ", тип ҡабаланып китте. Бәләкәй сағындалай, ат арбаһына ултырып, әсәһен ауыл осонаса оҙата сыҡты Хәтирә. Матур ғына итеп хушлаштылар. Сәғиҙә:

- Ирҙән ирҙең артығы юҡ, шул арала ҡандай матур донъя төҙөп алғанһығыҙ, ир тапмаһа буламы ул, түрә түрә инде, - тип ҡыҙы алдында кейәүенең бәсен күтәрергә лә тырышты. Өндәшмәне Хәтирә. Был хаҡта һөйләшер һүҙе юҡ уның.

**(Дауамы бар).**

✓ *Рәшит Шәкүр үҙе әйтеүенсә, "По следам географических названий" баҫмаһында ул тарихи Башҡортостан ерлегендәге Геродот заманында уҡ теркәп ҡалдырылған топонимика атамаларын бөгөнгө көндәргә тиклем өйрәнә.*



ӘҘИП ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ

# АРҘАҠЛЫ ҒАЛИМ ДА...

## яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре лә, ағайыбыҙ ҙа

**Башҡортлоҡ тураһында һүҙ сыҡһа, беҙ гелән милләтебеҙҙең ҡайһы бер абруйлы шәхестәре менән бер рәттән Рәшит Шәкүрҙе лә күҙ алдына баҫтырабыҙ.**



Ысынлап та, быйыл үҙенең оло ғүмер байрамын - 80 йәшен байрам иткән аҡһаҡал ошо йылдар эсендә халҡыбыҙ өсөн күпме изге эштәр башҡарҙы, киләсәк быуынға күпме белем һәм ғилем сәсте икән? Уның шым, әҙәпле, тауыш күтәрмәй генә башҡарған ғәмәлдәрен барлай башлаһаң, ысынлап та, Рәшит Закир улының күп ҡырлы шәхес икәненә шаһит булаһың: тел ғилеменә башҡорт телендә ике түгел, өс диалект, 12 һөйләш түгел, 16 һөйләш булыуын раҫлап, диалекттар һәм һөйләштәр классификацияһын тулыландырыусы ла, арҙаҡлы башҡорттар тураһында мәғлүмәтте бер баҫмаға туплаусы ла, "Башҡортостан энциклопедияһы"на нигеҙ һалыусы ла, ғалим да, яҙыусы ла, уҙған быуаттың 90-сы йылдарында республикаға суверенитет яулау сафының иң алдында булған "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең рәйесе лә, Ырымбурҙа башҡорттарҙың аҡсаһына һалынған Каруанһарай мәсетен кире ҡайтарыу мәсьәләһен өлкә депутаттарына "өҫтәл төйөп" аңлатыусы ла, шағир ҙа, публицист та... Исемлекте, шулай уҡ уның исем-дәрәжәләрен әллә күпме яҙырға һәм дауам итергә мөмкин булыр ине, әлбиттә. Әммә уның быға мохтажлығы юҡ һәм беҙ уны ябай, алсаҡ, кешелекле һәм кеселекле Рәшит ағай итеп беләбеҙ. Шундай шәхестәребеҙ тураһында йәш быуынға күберәк мәғлүмәт биреү өсөн беҙ улар хаҡында йышыраҡ һөйләргә, улар менән таныштырырға тейешбеҙ. Был йәһәттән Рәшит Закир улы оҙаҡ йылдар эшләгән М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты уны үҙенсәлекле тәбрикләне - коллегалары эшмәкәрлегенең бер йүнәлешен - топонимика мәсьәләләрен алып, "Башҡортостан топонимикаһы проблемалары" темаһына түңәрәк ҡор үткәрҙе.

Рәшит Шәкүр үҙе әйтеүенсә, 1986 йылда 2000 дана ғына баҫылған һәм шунда уҡ таралып бөткән "По следам географических названий" баҫмаһында ул тарихи Башҡортостан ерлегендәге Геродот заманында уҡ теркәп ҡалдырылған топонимика атамаларын бөгөнгө көндәргә тиклем өйрәнә. Башҡа сығыш яһаусылар билдәләүенсә, был баҫма - Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә аналогы булмаған китап, сөнки уға тиклем топонимиканы классификациялау тигән күренеш булмай, артабан инде 35 төрки тел ғалимдары үҙ телендәге топонимдарҙы Р. Шәкүр классификацияһы нигеҙендә башҡара. Бында филология фәндәре докторы Гөлнур Бохарованың Мәскәүҙә "Башҡорт топонимияһында һинд-иран субстраты" тигән темаға диссертация яҡларға барғанында баш ҡала ғалимдарының: "Башҡортостанда ысын мәғәнәһендә топонимика мәктәбе эшләй", - тиеүе лә Рәшит Закир улының хеҙмәтенә оло баһа ул.

"Тарихи Башҡортостан топонимияһын теркәп, уны картаға индереп, мин хеҙмәтем менән ошо ерҙәрҙең башҡорттарҙыҡы булыуын, уларҙың аҫабалығын нығытып ҡуйырға тырыштым", - ти юбиляр үҙе. Уның был фекере философия фәндәре кандидаты Айһылыу Хөсәйенованың фекере менән ауаздаш. "Донъялағы төрлө халыҡтар үҙҙәренә донъя үҙәген билдәләй. Кем өсөндөр ул театр, пирамидалар һ.б. булһа, башҡорттар өсөн донъя үҙәге - Урал тауы, Урал һырттары. Ул беҙҙең өсөн арҡа һөйәге булып тора. Арҡайым да арҡа һүҙе менән бәйле. Хатта шундай фараздар йөрөй, климат йылынып, донъяны һыу баҫҡанда ла, Урал тауҙары, Урал һырттары ғына ҡоро ер булып ҡаласаҡ һәм башҡа ҡитғаларҙан ҡотола алыусылар Уралға һыйынасаҡ. Шул ваҡытта беҙ үҙебеҙҙең атамаларыбыҙҙы, аҫабалығыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалырбыҙмы? Ә бит Башҡорт топонимияһында кешелектең бик боронғо, беҙ асылына ла төшөнөп етә алмаған сер ята. Шуға ла топонимия менән философия - улар бер-береһен тулыландырып торорға, топонимия философия күҙлегенән сығып тикшерелергә тейеш. Был йәһәттән беҙгә берлектә эшләйһе эштәр күп әле", - тип юҡҡа ғына билдәләмәне Айһылыу Хәмзә ҡыҙы. Философия менән топонимия берлеген күҙаллағанда, был йәһәттән Рәшит Шәкүрҙең эшмәкәрлеге тап ошо йүнәлештә бара ла инде: "Йәштән үк филологияны (әҙәбиәтте, телде) философия күҙлегенән сығып тикшерергә теләгәйнем. Шуға тәүҙә философия факультетына документтар тапшырғайным, һуңынан филологияға инергә булып киттем", - ти ул. Шулай ҙа, уның тикшеренеүҙәрендә философия барыбер ҙә үҙенең тәрән эҙен һала.

Башҡорт дәүләт университеты Сибай филиалының башҡорт һәм рус филологияһы кафедраһы мөдире, филология фәндәре кандидаты Наилә Ласынова иһә башҡорт топонимдарының рус теленә боҙоп тәржемә ителеүенә әсенеү белдерҙе. Күпме йылдар һөйләнелһә лә, ошо төбәктәге Төйәләҫ йылғаһы хәҙер башҡорттар араһында ла Худолазға әйләнеп бара, ә Ҡылтабан күле Табанка булып йөрөй. Үҙенең сығышында Наилә Азамат ҡыҙы бихисап миҫалдар килтерҙе.

Был түңәрәк ҡор Рәшит Шәкүрҙең топонимия мәктәбендә быуындар бәйләнеше, күсәгилешлек дауам итеүен дә раҫланы. Бөгөн дә студенттар курс эштәре, диплом эштәре итеп топонимия темаһын алһа, артабан туплаған белемдәрен мәктәптә уҡыусыларға тапшыра. Был йәһәттән М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның 3-сө курс студенты Изалия Хәлимованың Башҡортостандың геотопонимдары темаһы буйынса әҙерләгән сығышы топонимия буйынса төрлө өлкәләрҙә тикшеренеүҙәр алып барыу мөмкинлеген һәм зарурлығын раҫланы. Башҡортостан - ҡаҙылма байлыҡтар төбәге. Был төрлө объекттарға бирелгән атамаларҙа ла сағылыш таба. Мәҫәлән, Баҡыртау, Алтын йылға һ.б. шундай топонимдар был урында ниндәй ҡаҙылма байлыҡ булыуы тураһында һөйләй.

Илеш районы Үрге Йәркәйҙәге 1-се гимназияның 9-сы синыф уҡыусыһы Ғәлиә Имамова Иҫке Күктау ауылы топонимдары менән таныштырҙы. Ошо хеҙмәте менән ул БДПУ-ның уҡыусылар араһында үткәргән топонимия буйынса конкурсында ла ҡатнаша.

Мәҡәлә башында Рәшит Закир улы Шәкүровтың күп ҡырлы шәхес булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алынғайны. Был уның эшмәкәрлегендә лә сағылыш таба. Ошо киң ҡырлы хеҙмәттең бер генә йүнәлеше булған топонимикаға арналған түңәрәк ҡор иһә был өлкәлә бөгөн дә проблемалар барлығын, ошо тема буйынса китаптарҙы ҡабаттан нәшер итеү һәм Хөкүмәт кимәлендә Терминология комиссияһы эшмәкәрлеген ҡабаттан тергеҙеү зарурлығы булыуын асыҡланы. Ҡасандыр был өлкәлә эшләүселәр бармаҡ менән һанарлыҡ булһа, бөгөн топонимиканы төрлө күҙлектән сығып тикшереүселәр - Рәшит Закир улының шәкерттәре байтаҡ.

Мәҡәләне оло ғалимды оло юбилейы менән үҙенсәлекле итеп тәбрикләүсе М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты коллективына ҡушылып, Рәшит ағайға, уның үҙе яҙған:

*Башҡорт булыу өсөн бик күп кәрәк,*
*Тәрән аҡыл кәрәк, хис кәрәк,*
*Илде һаҡлар өсөн, яҡлар өсөн*
*Ҡайнар йөрәк кәрәк, көс кәрәк,* - тигән юлдарына өҫтәп, шулай тип тамамлағы килә: аҡылығыҙ ҙа, хис-тойғоларығыҙ ҙа ташып торһон, алдығыҙға алған эштәрегеҙҙең осона сығырға Аллаһы Тәғәлә көс бирһен, йөрәгегеҙ йөҙгә еткәнсе ҡайнар булһын, Рәшит ағайыбыҙ!

**Земфира ХӘБИРОВА.**

КӨЛӨРҺӨҢ ДӘ...

# СЕРӘКӘЙГӘ - ҺӘЙКӘЛ!



**Һәр йылда ла яҙ миҙгеле төрлөсә килә. Бына быйылғыһы, әйтәйек, бигерәк һағындырып ҡына, үтә инәлтеп кенә килә. Ә инде былтырғыһы иһә, шаулап-ярһып үҙ мәлендә килде һәм... серәкәйҙәрҙең баҫып алыуы менән иҫтә ҡалды.**

Серәкәй тураһында һүҙ сыҡҡас, бер иптәштең әсенеп әйткәне иҫкә төштө әле. Серәкәйҙәр уны бигерәк аптыратҡандыр инде, шуға ла ул йәне көйөүенән ни эшләргә белмәй, ошолай тип һөйләнеп торғайны.

- Серәкәй бигерәк йәнгә тейә. Бына рәхәтләнеп кенә ял итеп алайым әле, тип утты һүндереп йоҡларға барып ятаһың. Киреләһең, һуҙылаһың, ҡыҫҡаһы, йоҡларға урын тибәһең. Шул мәл ошо илаһи тынлыҡты боҙоп, ниндәйҙер безелдәү ишетелеп ҡала. Тора-бара уға икенсеһе, шунан өсөнсө, дүртенсеһе ҡушыла. Был безелдәүҙәр йоҡоно һыпырып алғандай юҡҡа сығара. Йоҡоға, пока, тип әйтәһең һәм ҡаты көрәшкә әҙерләнә башлайһың. Һөжүмгә серәкәйҙәр килә! Мейене бер генә уй быраулай. Ҡәбәхәттәрҙең барыһын да үлтерә һуғырға, береһен дә йәлләп тормаҫҡа! Ҡул аҫтына эләккән гәзитте ҡулға йомарлап тотоп, һөжүмгә әҙерләнәһең. Әммә... (бына ошоноһо бигерәк йәнгә тейә лә инде) алыш-көрәш юҡ. Үҙең уйлап ҡара әле. Дошмандарҙың яҡынайыуын тойоп, ҡапыл юрғанды алып ташлап һикереп тораһың, йүгереп барып утты яғаһың. Ҡулдағы гәзит, ана һуғам, бына һуғам, тип кенә тора, күҙҙәр серәкәйҙәрҙе эҙләй, ә улар - юҡ! Әле генә ҡолаҡ төбөндә безелдәп йөрөгән ҡан эскестәр шул арала йәшенеп тә өлгөргәндәр. Элеккеләре бит күпкә ябай булды. Уларҙы ҡарауыллап тороп үлтерә һуғырға була ине. Ә хәҙергеләре күпкә хәйләкәрерәк. Утты һүндерҙең - безелдәйҙәр, уттың яндырҙың - уларҙан елдәр иҫкән. Һөжүм итеүҙең файҙаһыҙ икәнен аңлап алғас, һаҡланыу-ҡасыу ысулдары тураһында уйлана башлайһың. Бында ла һайлау мөмкинлеге әллә ней юҡ бит әле. Иң һәйбәте - баш аша юрған менән бөркәнеп ятыу. Мине таба алмағас, таралышырҙар әле, тип үҙеңде йыуатҡан булаһың. Әммә бер мәл (эй, Хоҙайым) бер серәкәй юрған эсендә безелдәй башлай. Ней ҡайҙан ингәнен белеп булмай, ней тотоп алып атып үлтереп булмай. Ҡыҫҡаһы, күрмәгәнде күрһәтә инде был серәкәй...

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, тигәндәй, ысынлап та, күп осраҡта ошо бәләкәй генә бөжәккә сыҙарға тура килә шул. Ошо сыҙамлыҡҡа ишара яһап, кешеләр хатта уға арнап һәйкәл дә эшләп ҡуйғандар. Ул Ямал-Ненец округының Ноябрьск ҡалаһында урынлашҡан. Тимер серәкәйҙе урындағы эшселәр үҙ көстәренә таянып ҡына эшләгән. Уларҙың фекеренсә, был һәйкәл яңы эшкә килгән йәш эшселәргә сыҙамлы булырға өндәү булып тора. Уларҙы тимер серәкәй алдан уҡ аңғартып ҡуя: "Минә, бәләкәй генә бөжәккә, сыҙарға көс тапһаң, шул ваҡытта ғына һин Себер тарафтарында эшләй аласаҡһың!"

Ә инде серәкәйҙең үҙенә килгәндә, уның өс меңдән ашыу төрө билдәле. Рәсәйҙә иһә уның йөҙгә яҡын төрө көн күрә. Инә серәкәйҙәр кешене ун ике метр аралыҡта һиҙә. Күптәр беләлер инде, "апай" серәкәйҙәр генә ҡанды һура, ә "ағайҙар" иһә сәскәле үҫемлектәрҙең һуттары (нектар) менән туҡланып көн күрә (шуныһы ла буйтым еткән уларға, тип ҡуйҙы түгелме шул саҡ бер апай). Ҡан һурыр алдынан серәкәй ҡанды ойоштороусы матдәләр ебәрә. Аҙаҡтан улар тәнде ҡысыттыра һәм ҡыҙыл тапсыҡтар барлыҡҡа килтерә лә инде. Серәкәйҙәр менән көрәшеү юлдары күп кенә. Уларҙың төрлө еҫтәргә һиҙгер булыуын уңышлы ғына ҡулланып була. Мәҫәлән, серәкәйҙәр помидор ботағының, муйыл, аҡтамыр, ҡәнәфер, бесәй үләне, ала миләүшә, ҡанүлән, яран, бөтнөк сәскәләренең еҫен яратмай.

Мәҡәләмде иһә серәкәй менән бәйле бер ҡыҙыҡ хәл менән тамамлап ҡуйғы килә. Бер мәл Әҡсән ағайҙан (күптән мәрхүм инде, урындары йәннәттә булһын) һорай ҡуйғандар: "Һинең ун ике балаң бар. Исемдәрен дә белеп бөтмәйһеңдер әле?" Йәнәһе лә, уны шаярттылар. Быны ысынға алған Әҡсән ағай: "Нишләп белмәй тей, беләм, - тигән дә һанап киткән бармаҡ бөгөп, - Әхтәм, Зөһрә, Әсфән, Фирүзә, Әлхәм, Фәрзәнә, Әнис, Әҡлимә, Әлмәт, Әмин, Әлим..." Шулай һанай-һанай ун бергә барып еткән ул, ә бына ун икенсеһен иҫенә төшөрә алмай ҙа ҡуя икән. Уңайһыҙ хәлгә ҡалған күп балалы атай баш ауыртыуына һылтанып, урындыҡҡа барып ятырға мәжбүр булған. Ошо сетерекле хәлдән уны серәкәй ҡотҡарған. Шаян кешеләрҙең һөйләүе буйынса, уны, йәнәһе лә, шул мәл серәкәй (йәғни, комар) бимазалай башлаған. Уның безелдәүен тыңлап ятҡан Әҡсән ағай ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй, ырғып килеп тороп ултырған: "Иң бәләкәй ҡыҙымдың исеме бит Ҡәмәр!"

Әйткәндәй, ун ике бала тәрбиәләп үҫтерергә йөрьәт иткән һәр атай-әсәй ҙә һәйкәлгә лайыҡлылыр, моғайын.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺӨЙӨҮҘӘН... дарыу бармы?

■ Лондон колледжы хеҙмәткәрҙәре 1000 игеҙәк ҡатын-ҡыҙҙың йөҙ төҙөлөшөн тикшергән һәм ҡайһы һыҙаттар кешегә нәҫел буйынса бирелә икәнен асыҡларға тырышҡан. Һынауҙарҙа монозиготалы (уртаҡ гендар иҫәбе 100 процент) һәм дизиготалы (яҡынса 50 процент уртаҡ гендар) игеҙәктәр ҡатнашҡан. Йөҙ оҡшашлыҡтарын билдәләп, белгестәр нәҫелдән бирелгән һыҙаттарҙы иҫәпләп сығарған. Был һан 0-дән 1-гә тиклем була алған (0 - гендар бер роль дә уйнамай, 1 - берҙән-бер фактор). Асыҡланыуынса, күберәк танау осононң, ирендәр тирәһендәге өлкәнең, бит осо һөйәгенең, күҙ мөйөшөнөң формаһы нәҫелдән күсә.

■ Германия ғалимдары раҫлауынса, тоҙло ризыҡ ашағандан һуң кешенең организмында шыйыҡлыҡ күберәк йыйыла. Бынан тыш, тоҙло ризыҡ асығыуҙы көсәйтә. 2009 йылдан 2011 йылға тиклем орбитала булған Рәсәй космонавтарын тикшергәндән һуң улар ошондай һығымтаға килгән. Көндәлек тоҙ ашау күләмен 6 грамдан 12 грамға тиклем күтәргәс, космонавтар һыуҙы аҙыраҡ эсә башлаған. Йәғни, шыйыҡлыҡтың күп өлөшө организмда ҡалған. Белгестәр космонавтарҙың аппетиты күтәрелеүен дә билдәләгән. Ғалимдар фекеренсә, тоҙ тәьҫирендә бөйөрҙәр һыуҙы кире эшкәртә башлай.

■ Дания ғалимдары синтетик өҫтәмәләр һәм витаминдар эсмәҫкә кәңәш итә. Белгестәр фекеренсә, организм бындай дарыуҙарҙан файҙалы берләшмәләр түгел, ә хәүефле синтетик компоненттар ала. Улар ашҡаҙан сей яраһына килтерә. Шулай уҡ иртә үлеү хәүефе лә бар. Дарыуханаларҙа һатылған А, С һәм Е витаминдарын эсеүселәр үҙ тиҫтерҙәренә ҡарағанда иртәрәк үлә, ти белгестәр. Витаминдар аҙыҡ менән инергә тейеш. Емеш-еләк, йәшелсә кеше өсөн витамин сығанағы булып тора. Бынан алда Колорадо университеты ғалимдары бетакаротинды күпләп ҡулланыу үпкә яман шешенә килтерә, тип белдергәйне. С витаминын саманан тыш ҡабул итеү йөрәк-ҡан тамырҙарына зыян итә. Витаминдарҙы бары тик табип кәңәше менән генә ҡабул итергә мөмкин.

■ Британия ғалимдары һөйөү ғазаптарынан ҡотҡарасаҡ дарыу уйлап тапҡан. Тиҙҙән уны һатыуға сығарырға ла йыйыналар икән. Был дарыуҙы яуапһыҙ мөхәббәттән яфа сиккәндәргә тәғәйенләйәсәктәр, имеш. Яңы дарыу айырылыуҙы, яуапһыҙ һөйөүҙе еңелерәк кисерергә ярҙам итәсәк. Етмәһә, ул яңғыҙ кешеләргә лә файҙа килтермәксе. Мөхәббәттең уларҙы урап үтеүен бындайҙар ауыр кисерә. Бына ошо ғазаптарҙан да ҡотҡарасаҡ ул. Хәҙер белгестәр яңы дарыу уйлап табырға кәрәк, тип белдерә. Ғаилә булып, оҙаҡ йылдар бергә йәшәгән парҙар бер-береһенән һыуына төшә икән, уларҙың мөхәббәттәрен дөрләтеп ебәрергә булышлыҡ итергә кәрәк, тип иҫәпләй улар.

■ Aviva компанияһы хеҙмәткәрҙәре Бөйөк Британияла йәшәүсе 2 мең кеше араһында һорау алыуҙар үткәргән. Һәр бишенсе респондент йомортҡа бешерә һәм лампочка алыштыра белмәгән. Уларҙың өстән бер өлөшө рецепттар китабына ҡарамайынса аш әҙерләй алмай. Шулай уҡ яуап биреүселәрҙең яртыһы, баланың подгузнигын алыштырырға тура килһә, нимә эшләргә лә белмәйәсәкмен, тип яуап биргән. 60 процент респондент юлда тәгәрмәс тишелһә, шулай уҡ аптырауҙа ҡаласаҡмын, тигән. Яуап биреүселәрҙең 47 проценты - кәштә элә белеүе, 53 проценты машинаның майын алыштыра алыуы менән "маҡтанған". 43 процент ҡатнашыусы был тормошта кәрәк булған һөнәрҙәргә атаһынан, 35 проценты әсәһенән өйрәнгән. 25 йәштән йәш булған респонденттарҙың 10-дан 4-һе ауыр хәлдә ҡалғанда интернетҡа мөрәжәғәт иткән.

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

**Ошо көндәрҙә Инйәр ҡасабаһы мәҙәниәт йортонда "Ағы барҙың - туғы бар" тип исемләнгән һөт байрамы үтте. Инйәр ағинәйҙәре ойоштороған сарала Йөйәк, Уҫманғәле, Межгорье ағинәйҙәре лә ҡатнашты һәм үҙ оҫталыҡтарын сағылдырған күргәҙмәләрен ҡуйҙы. Яҡташтарының байрамын йәмләргә Өфөнән килеп еткән шағирә, йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдыҡова ла шиғри күстәнәстәре менән уртаҡлашты, сараға мәртәбә өҫтәне.**

# АҒЫ БАРҘЫҢ - ТУҒЫ БАР,

## йәки, Һөттөң ҡәҙерен белеүселәр тураһында



Инйәр ағинәйҙәре етәксеһе, үҙ ғүмеренең 49 йылын балалар уҡытыуға арнаған Шәрғиә Яҡшыдәүләтова байрамды асып: "Иң төп маҡсатыбыҙ - йәштәребеҙҙе магазин һөтөнән баш тарттырып, ауыл һөтөнә йөҙ борҙороу, уларға, һөт ризыҡтары етештереп, ғаиләнде туйындырырға ла, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеп, матди файҙа алырға ла мөмкин икәнен күрһәтеү. Бөтә нәмә һөттән башлана: кеше тыуғас та әсә һөтө менән быуынын нығыта, һөт уға ғүмере буйы көс бирә", - тине.

Театрлаштырылған тамашаға ҡоролған сарала Инйәр ағинәйҙәре боронғо рецепттар буйынса әсе һәм сөсө ҡатыҡ, ҡорот, эремсек, ҡыҙыл эремсек, турта әҙерләү оҫталыҡтары менән бүлеште. Уларҙың сығыштарын урындағы музыка мәктәбе уҡыусыларының йыр-бейеүе тағы ла йәнлерәк итте. Ғөмүмән, сәхнәнән бик күп аҡыллы, файҙалы кәңәштәр яңғыраны. Һөттән башлап, һөт ҡушып эшләнгән башҡа ризыҡтарға тиклем йәнең теләгән рецептты яҙып алыу мөмкинлегенә эйә булды сараға килеүселәр. Шәрғиә Исмәғил ҡыҙы боронғоларҙың һыуыҡсыһыҙ ҙа май һаҡлау серҙәре менән уртаҡлашып, әсәһенең нисек итеп ҙур тәпәнгә аҡ май йыйып, агент килгәнсе һаҡлауы тураһында һөйләне: "Әсәйем иҫкертмәй, оҙаҡлатмай ғына майҙы бешә лә, тәпәнгә, эсендә һауаһы ҡалмаҫлыҡ итеп баҫып ҡуя. Һауа үтһә, май иҫкерә, күгәрә башлай. Тәпән тулғас, ауыҙын ағас япма менән ныҡ итеп яба, һауа инмәһен өсөн тәпәндең ситтәренә балауыҙ йәбештерә. Ауылға май йыйыусы килһә, тәпәндәге аҡ майҙы иретә лә, килеп сыҡҡан һары майҙың таҙаһын, юғары сортлыһын ғына тапшыра торғайны. Бөтөн май шулай дәүләткә китә. Әсәйем 3 һыйыр тотҡас, беҙгә майы-ҡаймағы, ҡатығы ла артып ҡала ине. Бер һыйыр аҫыраған ғаиләләр иһә май күрмәй, ҡатыҡ күрмәй, ойотҡан менән генә йәшәне. Беҙ ул яҡтан бәхетлерәк булдыҡ".

Йәйәк ауылынан килгән Гөлсирә Ислам ҡыҙы Салауатованан турта тип аталған туҡлыҡлы милли аҙыҡ эшләү серҙәрен яҙып алдыҡ. Туртаны былай эшләйҙәр: һары майҙы ҡыҙған табала эретәләр ҙә, шыйыҡ ҡамыр барлыҡҡа килерлек итеп арыш оно йә 2-се сортлы он һалып, килеп сыҡҡан масса ҡыҙғылт төҫкә ингәнсе болғатып торалар. Турта әҙер булғас, уға тоҙ һалалар ҙа (теләгән кеше шәкәр ҡомо өҫтәй ала), һалҡын урынға һыуытырға ултырталар. Һыуынған турта ҡата һәм ашарға әҙер була. Гөлсирә Салауатова әйтеүенсә, борон был аҙыҡты эшкә киткән, оҙон юлға сыҡҡан ираттарға әҙерләп бирер булғандар. "Туҡлыҡлылығы, оҙаҡ һаҡланыуы арҡаһында был аҙыҡ сәфәргә сыҡҡанда бик уңайлы булған. Мин әле лә уны бешереп алам", - тине Гөлсирә Ислам ҡыҙы. Инйәр ауылы ағинәйе Зәкинә Шәрәфетдин ҡыҙы Ғәлимова сөсө ҡатыҡ әҙерләү серҙәре менән бүлеште. Сөсө ҡатыҡ - ойотмос һалынған, бер көнгә йылыға ултыртып ҡуйылған япйбай һөт була икән. "Бөгөн был эсемлекте кибеттә "кефир" тип һаталар, - тине ағинәй. - Сөсө ҡатыҡтан тыш әсе ҡатыҡ та була. Уныһы - шул уҡ рецепт менән әҙерләнеп, аласыҡта йәки көбөлә оҙағыраҡ (3-4 көн) тотолған ойотмосло һөт".

Өс тиҫтә йыл Үзбәкстанда йәшәп, башҡорт милли ойошмаһын етәкләп, Уҫманғәле ауылына атай нигеҙенә йәшәргә ҡайтҡан Афина Ғөбәйҙуллина әйтеүенсә: "Ауыл ерендә кемдер бар эштәрҙе башлап йөрөргә тейеш, халҡыбыҙ шундай әйҙәләүҙәргә күнеккән. Беҙҙең ауылда депутаттар эшләй торған, әйҙәләй торған ошо эште хәҙер ағинәйҙәргә - беҙгә ҡушалар... "

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# БАШ ИТЕ ТАБЫНЫНА САҠЫРАМ...

**Ғүмерҙең, йылдың һәр миҙгеле, айы, көнө беҙҙән билдәле бер ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен талап итә. Кешелектең һәр аҙымы, хатта ниәт иткән маҡсаттары ла әүәл-әүәлдән ҡанундарға яраҡлаштырылған. Уларҙың үтәлеүе бөтә кешегә лә фарыз иҫәпләнгән. Быларҙың бөтәһен дә йола, йола үтәү, йола атҡарыу тиҙәр.**



Йолалар бик күп төрлө. Уларҙың ҡайһы берҙәре билдәле бер миҙгелгә генә ҡағылышлы. Ошондай йолаларҙың береһе - баш ите ашына саҡырыу йолаһы. Борон-борондан ата-бабаларыбыҙ, һуғым һуйғас, малдың башын ҡәҙерләп, ҡараңғы, һалҡын урынға элеп ҡуя торған булған. Һуйылған малдың йәне яҙға тиклем шул баштың эсендә һаҡлана, тигән ышаныу ҙа йәшәгән. Яҙ етеп, көндәр йылына башлағас, малдар көтөүгә сыҡмаҫ борон, һәр ауылда "Баш итенә саҡырыу" йолаһын үткәрә торған булғандар. Ошо бик боронғо, хәҙер инде онотола ла башлаған йоланы тергеҙеү, яңыртып күрһәтеү теләге менән Яҡут ауылы ағинәйҙәре Аҡһары ауылы ағинәйҙәрен үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡырҙы.

Был көндө Яҡут ауылы мәҙәниәт йорто байрамса биҙәлгәйне. Килгән ҡунаҡтарҙы милли кейемдәр кейгән, баштарына аҡ яулыҡтарын бәйләгән Яҡут ауылы ағинәйҙәре йыр, бейеү менән ҡаршы алып, түргә үтергә саҡырҙы. Залда ҙур табын әҙерләнгән, стеналарҙа Яҡут ауылы ағинәйҙәренең ҡул эштәренән күргәҙмә теҙелгән. Йола буйынса, хужабикәләр килгән ҡунаҡтарҙың ҡулдарын еҙ таҫҡа ҡомғандан һыу ҡойоп йыуҙырып, өҫтәл янына саҡырҙы. Байрам сараһын Яҡут ауылының төп ағинәйе Хәмдиә Рәшитова өҫтәлдәге ризыҡҡа, килгән ҡунаҡтарҙың иҫәнлегенә аят уҡып башлап ебәрҙе. Был байрам сараһын үткәреүҙә Яҡут ауылы ағинәйҙәре барыһы ла әүҙем ҡат-

*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП*

# БЕР ҠЫЙЫҠ БАШЫ...

## ике төрлө донъя

**"Тураһын әйтеп туғаныңа ярамағанда кинәйәләп әйтеү, берәй фәһемле ваҡиға йә тарих һөйләү, ишаралау күпкә отошло", тигәйнек үткән һандағы "Кинәйәне киңәтеп" рубрикаһында. Туғанға ярап була ул. Бушҡамы ни, "Ике туған талаша, атҡа менһә, яраша", тиҙәр. Туғандың тура әйткәнде ҡабул итеренә, һис юғы, үпкәләгән хәлдә лә, ғәфү итеренә ышанғанға, беҙ туғандарыбыҙҙы йышыраҡ рәнйетәбеҙ ҙә инде.**



Ә бына таныш булмаған кешегә, йәғни туған булмағанға тураһын бәреп ҡара: һөҙөмтәһе һин көткәнсә булмауы ихтимал. Аңлашылмаусанлыҡтар, ҡапма-ҡаршылыҡтар, хатта дошманлашыу шуның арҡаһында килеп сыға түгелме? Һүҙ кешенең берәй етешһеҙлеген күҙенә бәреп әйтеү тураһында барғанын аңлағанһығыҙҙыр. Ә бына кешенең ыңғай яҡтарын күреү ике яҡ өсөн дә файҙалы. Күреү, әммә шаштырып маҡтау түгел. "Кешене юҡҡа сығарам тиһәң, уны бер туҡтауһыҙ маҡта", тип бушҡа әйтмәйҙәр бит.

Тимәк, үҙ-ара мөнәсәбәттә тура һүҙлелек һәр саҡ ыңғай һөҙөмтә бирмәй, ул проблеманы хәл итеүгә ҡарағанда, киреһенсә, көрсөккә алып килеүе ихтимал. Ә бына тәү ҡарамаҡҡа бер ниндәй логикаға ҡоролмаған кинәйәләр, мәҫәлән, кешене уйланырға мәжбүр итә. Улар һинең ҡулыңа әҙер рецепт тоттормай, теге йәки был хәл-ваҡиғаның сиселешен үҙең уйлап табырға һәм ҡарар ҡабул итергә тейеш булып сығаһың. Шул саҡ оҙаҡ ваҡыт таба алмай йөрөгән яуап "ҡылт" итеп өҫкә ҡалҡып сыға, хатта ҡай саҡ үҙең дә аптырап ҡуяһың. Психологияла был күренеш инсайт, йәғни һиҙгерлек, берәй нәмәнең асылына ҡапыл төшөнөү, тип атала.

Мәҫәлән, бер кеше оҙаҡ ваҡыт бер аяғында баҫып тора, ти. Һыңар аяҡта оҙаҡ торһаң, ул аяҡ арый, быуындар һыҙлай башлай. Кеше бына-бына хәле бөтөп ҡоларға тейеш. Әлбиттә, ул башҡаларҙан ярҙам һорай. Ярҙам итергә ашығыусылар оҙаҡ көттөрмәй. Берәү һыҙлаған аяҡҡа массаж яһай башлай, икенсеһе ҡолаҡ артына энә ҡаҙарға тәҡдим итә. Йәнәһе, шулай иткәндә, аяҡ тарамыштары яҙыласаҡ. Өсөнсө кеше уның ҡолап барыуын шәйләп, таяныс ҡулын һуҙа. Был хәлде ситтән күҙәтеүселәр һыңар аяғында торған кешене йәлләй, таяныс ҡулын һуҙған кеше менән һоҡлана. Шул саҡ аҡыл эйәһе лә табыла. "Бер аяғында баҫып торған ике аяғы ла булмаған кешегә ҡарағанда күпкә бәхетле", - ти ул, бөтәһе лә ишеткәндәй итеп. Былар эргәһенән үтеп барыусы: "Һин үҙеңде һығылмалы пружина кеүек күҙ алдына килтер. Бар ихтыяр көсөңдө туплап, уйыңды ошо йүнәлешкә тупла, һыҙланыуың шундуҡ бөтөр", - тип кәңәш бирә. Үҙ ғүмерендә күпте күргән берәү: "Иртәгә һыҙлау үҙенән-үҙе бөтәсәк", - ти, иҫе китмәй генә. Ниһайәт, һыңар аяғында торған бахыр эргәһенә тағы берәү килә. "Ниңә һыңар аяғында ғына тораһың? - тип һорай ул. - Икенсе аяғынды турайт, һинең бит икенсе аяғың бар"...

Үткән һандарҙағы кинәйәләр дини темаға ҡағылғайны, был һанда донъяуи хәл-ваҡиға тәҡдим итәбеҙ. Кинәйә беҙҙән - киңәйтеү һеҙҙән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

Ҡыйыҡ башындағы баҡсала ике ғаилә йоҡлай. Яратмаған килене менән ғәзиз улының бер-берең енә һыйынып ҡына йоҡлауын күргән әсәй кеше бындай хәлгә тыныс ҡына ҡарай алмай. Ахырҙа, улы менән киленен йоҡоларынан уятып, ҡысҡырып ебәрә: "Бынауындай эҫелә һеҙ нисек бер-берегеҙгә һыйынып ятаһығыҙ? Был һеҙҙең һаулығығыҙға зыян килтерә!"

Баҡсаның икенсе осонда ҡыҙы менән яратҡан кейәүе йоҡлай. Улар, киреһенсә, бер-береһенән айырым ята. Әсәй кеше уларҙы иркәләп кенә уята ла: "Ҡәҙерлеләрем, бынауындай һалҡын төндә һеҙ ниңә улай айырым ятаһығыҙ? - ти ул. - Бер-берегеҙгә һыйынып ятығыҙ".

Әсәй кешенең был һүҙҙәрен ишеткән килене, доға уҡығандай, ҡулдарын өҫкә күтәреп: "Эй, Хоҙайым, һинең ҡөҙрәтең шул тиклем киң: ҡыйыҡ башында бер баҡса, ә унда ике төрлө климат", - ти әсенеп.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

нашты. Кемдер бәлеш, кемдер ҡоймаҡ, кемдер бауырһаҡ, ҡош теле һәм төрлө-төрлө тәмлекәстәр бешереп алып килгән. Өҫтәл тултырып ҡорото, ҡатығы, эремсеге, емеш-еләге ҡуйылған. Таңһылыу Исламғолова әҙерләгән буҙа ла өҫтәл түрендә урын алған. Яҙғы ризыҡтарҙың береһе - баш-тояҡтан әҙерләнгән дерелдек тә бар табында.

Ошолай итеп, күмәк кеше йыйылып, бер ҡаҙанда, бер мейестә, бер табала бешерелгән, күмәкләп ашалған ризыҡ "йола ризығы" тип атала. Йола ризығының саҡырылған ҡунаҡтарға ғына түгел, саҡырылмай килгәндәрҙең дә алдынан, артынан артып ҡалырлыҡ булыуы, етемеҫергә, ҡош-ҡортҡа ла өлөш ҡалырлыҡ итеп әҙерләнеүен күҙ уңында тотоп, мул табын ҡорҙо был көндө Яҡут ауылы ағинәйҙәре. Сөнки табын барышында килеп кергән ҡунаҡтарҙы улар: "Маҡтап йөрөйһөгөҙ, әйҙүк, түрҙән уҙығыҙ, яҡшының ҡунағы бер көндә", - тип ҡәҙерләп ҡаршы алды. Бына ошолай күмәкләп йыйылып, мул ризыҡ әҙерләү, уның артып ҡалыуы киләһе йылдарҙа ла малдарҙың ишәйеүенә, ризыҡтарҙың мул булыуына ишара.

Яҡут ауылы мәҙәниәт йортоноң художество етәксеһе, ошо күркәм байрамды ойоштороусы Рәмзиә Әбйәлилова табынды: "Һыу бойһонор быуаға - ил бойһонор йолаға", тигән һүҙҙәр менән асып ебәрҙе. Яҡут ауылы ағинәйҙәре бешерелгән ит, баш ите, бәрәңге һалынған тәрилкәләрҙе табынға теҙҙе. Бисмиллаһын әйтеп, малдарыбыҙ һилле булһын, ҡото китмәһен тигән теләктәр менән баш итен ауыҙ итеү башланды. Баш итенең һәр бер өлөшө тураһында Рәмзиә ентекләп һөйләп барҙы. Баш бешеп сыҡҡас, итте яңаҡ һөйәгенән айырып, аҫҡы, өҫкө өлөштәргә бүләләр. Һәр өлөштөң дә үҙенең символик мәғәнәһе бар. Мәҫәлән, яңаҡ һөйәге янындағы һум итте хужаға һалалар. Нәфис һүҙле, йомшаҡ телле кешегә телдән өлөш сығаралар, күҙе насарырыаҡ күргәндәргә күҙ майы, ҡолаҡҡа ҡатыраҡ булғандарға ҡолаҡ кимерсәге һалына.

Ит ашалып бөтөүгә, өҫтәлгә һалмалы һурпа килтереп ултыртылды. Ит һоғондороу йолаһын да иҫкә төшөрҙө был көндө яҡуттар. Һәр бер ҡәҙерле ҡунаҡҡа ит һоғондороп бөткәс, ағинәйҙәр көлөшә-көлөшә, шаян, уйын-көлкөлө, йор һүҙҙәр менән: "Ите - иткә, һурпаһы - биткә" тип, тағы ла өҫтәлгә ҡоротло һурпа сығарҙылар. Ҡунаҡтарҙы тәмле ризыҡтары менән һыйлаған арала ата-бабаларыбыҙҙың бик борон йырлаған йырҙарын да йырлап ишеттерҙе ағинәйҙәр. Ит, аш ашалғас, ҡоймаҡлап сәй эскәс, хужабикәләр ҡунаҡтарҙы төрлө уйындар уйнарға, боронғо йыр-бейеүҙәрҙе иҫкә төшөрөргә саҡырҙы. "Наза", "Косилка-молотилка" уйындарын уйнатып, Яҡут ауылы мәҙәниәт йорто директоры Рәүеф Әбйәлиловтың баян моңдарына ҡушылып йырлап, бейеп, былай ҙа күтәренке күңелдәргә тағы ла дәрт өҫтәне ағинәйҙәр. Бына шулай, боронғо йолаларыбыҙҙы тергеҙеп, милли аш-һыуҙарыбыҙға өҫтөнлөк биреп, туған-тыумасаларҙы, дуҫ-ҡәрҙәштәрҙе бергә туплап, гөрләтеп йәшәп ята Яҡут ауылы ағинәйҙәре.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйткем килә. Киләсәктә оло быуын кешеләре генә түгел, йәштәребеҙ ҙә милли ризыҡтарға өҫтөнлөк бирһә, өҫтәлдәрендә ҡымыҙ, буҙа, ҡорот, айран кеүек ризыҡтар өҫтөнлөк алһа, үҙебеҙ ҙә күбекмай, талҡан. эремсектәрҙе күберәк ҡулланһаҡ, милләтебеҙ һау-сәләмәт булыр, борондан ҡалған шөғөлдәребеҙ ҙә юғалмаҫ, йолаларыбыҙ ҙа онотолмаҫ ине.

**Тамара МАЛБАЕВА,**
**Көйөргәҙе районының ағинәйҙәр ойошмаһы етәксеһе.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Бәхеткә кәртәләр ҡуймағыҙ

**Быныҡ өсөн:**

- Үҙеңә бер тапҡыр ҡәтғи итеп: " ... тороп, һәлкәүләнә һәм тормоштан ҡәнәғәтлек ала алмайым" , - тип әйтергә кәрәк. Һәлкәүләнеүҙе һәм тормош менән ләззәтләнеүҙе ваҡиғалар уртаһында ҡайнап ҡына алырға мөмкин.
- Һәр саҡ үҙеңә: "Минең эргә-тирәмдә барған ваҡиғалар мине нимәгә өйрәтә?" - тигән һорау бирергә кәрәк.

Тормошта бер ваҡытта ла идеаль тәртип булмаясаҡ! Бәхетте беҙ офоҡта күренгән ниндәйҙер монар тип ҡабул итәбеҙ, әйтерһең дә, сүллектә шыуышабыҙ һәм алыҫта "Бәхет" тип яҙылған таҡта күренә. "Шунда барып етһәм, бәхетле булырмын", - тип үҙ-үҙебеҙҙе алдайбыҙ. Ҡайһы берҙә логик нигеҙ уйлап табабыҙ: "Мин әлегә бәхетле йәшәй алмайым, сөнки ваннала сантехника алыштырылмаған. Бына бер айҙан һуң..." Икенсе ай ҙа килеп етә, балалар ауырый башлай, бесәй балалай һ.б. Һәм беҙ тағы ла: "Бына май башында..." - тип үҙебеҙҙе алдаштырабыҙ.

## Һорамағанға кәңәш бирмә!

Ҡайһы берҙә ниндәйҙер китапты уҡыйһың да, ул шул тиклем күңеленә ята, тиҙ генә уны дуҫыңа тәҡдим итә һалаһың: "Уҡы, китап түгел, ә шедевр!" Һуңынан уның ҡасан шылтыратҡанын түҙемһеҙләнеп көтәһең. Ә ул шылтыратмай... Ярты йылдан китапты кире ҡайтарып биреүен һорайһың һәм уның хатта уны уҡымағанлығын һәм юғалтҡанын аңлайһың. Был мәҫәлдең фәһеме: һин ниндәйҙер яңылыҡты ҡабул итергә әҙер булһаң да, башҡалар уға өлгөрөп етмәгән әле! Ҡыҫҡаһы, әгәр һеҙҙән кәңәш һорамайҙар икән, тимәк, уларға был мәғлүмәт кәрәкмәй.

## Былар барыһы ла мине нимәгә өйрәтә ала?

Уйығыҙҙа ғына үткән тормошоғоҙға байҡау яһағыҙ һәм ни өсөн теге йәки был юлды һайлауығыҙҙы аңларһығыҙ. Тегендә һәм хәҙерге тормош юлығыҙҙа төрлө кешеләрҙе күрерһегеҙ - уҡытыусыларҙы, яратҡан йәки бер самолетта осҡан бөтөнләй белмәгән кешеләрҙе - улар ниндәйҙер кимәлдә һеҙгә ниндәй йүнәлештә хәрәкәт итергә икәнлекте аңларға ярҙам итә. Китап өйөмө араһында табып алған әҫәрҙең фекерләүегеҙҙе формалаштырырға ярҙам итеүен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Барлыҡ күңелһеҙ ваҡиғаларҙы күҙ алдынан үткәрегеҙ - күңел яраларын, ауырыуҙарҙы, еңелеүҙәрҙе һәм финанс ауырлыҡтарын - уларҙы еңеп сығып, һеҙ көслөрәк булдығыҙ, кешеләрҙе аңларға өйрәндегеҙ. Шулай уҡ ҙур "һәләкәттәрегеҙҙе" лә күрерһегеҙ, улар ҙа яҙмышығыҙҙың бер өлөшө. Һөҙөмтәлә шундай тойғо ҡалыуы мөмкин: был ваҡиғалар эҙмә-эҙлекле барып, бер ваҡиға икенсеһенә әүерелә.

Әлбиттә, һәләкәтле ваҡиғаларға ситтән ҡарауы ауыр. Күпмелер ваҡыт: "Кит, юҡты, быны тормошомда булыуы мөмкин түгел", - тиерһегеҙ. Әммә ярты йыл да үтмәй, эшһеҙ ҡалыуығыҙҙың ҙур пландың бер этабы ғына икәнен аңлай башлайһығыҙ. Йыһан - ныҡышмал һәм түҙемле уҡытыусы. Уның сигналдарын күҙәтегеҙ һәм тормошоғоҙ шыма ғына барыр. Әммә руль артында йоҡламағыҙ - тормош һеҙгә әсерәк һабаҡ биреүе мөмкин: йә банкротлыҡ, айырылышыу, инфаркт һ.б.

## Киләһе һабаҡ ҡайҙа ҡарауыллай?

Ул һәр саҡ беҙҙең эргәлә генә... Уның сираттағы һабаҡ икәнен аңлайһығыҙмы йәки дәрес ҡалдырырға өмөтләнәһегеҙме - мөһим түгел!

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✔ *Дөрөҫ һүҙгә үпкәләргә ярамай, уның үҙенә лә шул уҡ дөрөҫлөк менән яуап бирергә кәрәк.*

*(Данил Рудый).*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БЕЛОРЕТ РАЙОНЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**16-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Бикле. Ирәндек. Иртәгеһе. Һаҡмар. Ҡор. Гәрсис. Эшкә. Ағиҙелкәй. Илья. Әсәд. Шифа. Әсәйем. Навка. Бауыр. Түҙ. Еләң. Ҡыҙың. Атлы. Уғры.

**Вертикаль буйынса:** Ҡабалана. Ибраһимов. Ғәҙелша. Иртә. Талҡаҫ. Гүйә. Итәктә. Абҙаҡ. Эйә. Ырыу. Еңмеш. Ураҙ. Есеме. Ырар. Һөйгәндәрҙең. Ирәбе. Марс. Россиянмын.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (5) дүшәмбе | 4:09 | 5:39 | 13:30 | 19:18 | 20:48 | 22:18 |
| 2 (6) шишәмбе | 4:07 | 5:37 | 13:30 | 19:20 | 20:50 | 22:20 |
| 3 (7) шаршамбы | 4:05 | 5:35 | 13:30 | 19:22 | 20:52 | 22:22 |
| 4 (8) кесе йома | 4:03 | 5:33 | 13:30 | 19:24 | 20:54 | 22:24 |
| 5 (9) йома | 4:01 | 5:31 | 13:30 | 19:26 | 20:56 | 22:26 |
| 6 (10) шәмбе | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 19:28 | 20:58 | 22:28 |
| 7 (11) йәкшәмбе | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 19:29 | 20:59 | 22:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ҠАР ҺЫУЫ



**Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы ағинәйҙәре "Ҡар һыуына барыу" йолаһын тергеҙеү маҡсатында Ғәйнизәр тауы эргәһендәге Ғәйнизәр шишмәһенә барҙы.**

"Ярмалы ғына ҡар менән биттәрҙе йыуҙыҡ, уны тундырғыста һаҡлап, битте йыуып йөрөһәң, йыйырсыҡтар яҙыла икән. Яҙ, ҡар һыуҙары тураһында йырҙар йырланыҡ, шиғырҙар уҡыныҡ, - тип, Фәрзәнә Мөхәмәтшина ҡар һыуының шифаһы тураһында һөйләне. - Яҙ ташҡан һыуға ҡарап тороу кешене тынысландыра, ағым һыуҙың барлыҡ хәсрәттәрҙе, борсолоуҙарҙы, сирҙәрҙе ағыҙып алып китеүен теләргә кәрәк. Аллаһы Тәғәләгә рәхмәттәр әйтеп, еребеҙгә, йорт-илгә именлек теләп, биҙрәләргә урман яғынан ағып килгән ҡар һыуы алдыҡ. Ҡар һыуы менән өйҙәрҙе йыуып сыҡһаң, уның энергияһы таҙара, гөлдәргә һипһәң, улар сәскә ата. Таҙа ҡар һыуын эсһәң, ул организмға ла файҙалы. Һарғылтыраҡ төҫтәге ҡар һыуын сайпылтмай ғына көйәнтәләп алып ҡайттыҡ, сәй ҡайнатып эстек. Ҡар һыуына барыу йолаһы - башҡорттоң тәбиғәт балаһы булыуына тағы бер ишара".

**Гөлбикә КЕЙЕКБАЕВА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Әбйәлил районы Буранғол ауылында йәшәүсе ғәзиздәрҙән-ғәзиз тормош иптәшем, һөйөклө әсәйебеҙ, өләсәйебеҙ **Рәсилә Сафиулла ҡыҙы ВӘЛИЕВАны** ихлас күңелдән тыуған көнө менән ҡотлайбыҙ! Өйөбөҙҙөң йәме, ҡото, беҙҙең серҙәшебеҙ, кәңәшсебеҙ, терәгебеҙ, тормошобоҙҙоң мәғәнәһе һин бит. Һин булғанға беҙ бәхетле. Артабанғы ғүмерең оҙон, һыулығың ныҡлы, бәхеттәрең мөлдөрәмә тулы, иртәләрең - ҡояшлы, көндәрең көләс, кистәрең - айлы, күңелең һәр саҡ тыныс булһын.

**Иң изге теләктәр менән, тормош иптәшең, балаларың.**

* * *

Апрель айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Баймаҡ районы** Әмин ауылынан Марат Әүәлбаев, Ниғәмәт ауылынан Г. Кейекбаева, И. Иҫәнбаева, Н. Сакина, **Баймаҡ ҡалаһынан** Зифа Рәхимова, **Әбйәлил районы** Аҫҡар ауылынан Зөбәйлә Иҙрисова, Целинный ауылынан Зөбәйлә Сәйәхова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ һәм иң-иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ. Теләктәрегеҙ - уң, тыуасаҡ таңдарығыҙ һәр ваҡыт нурлы, тормош күгегеҙ аяҙ булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 апрель "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+
**30 апрель "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия 16+
**2 май "Әбейүшкә@тушка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+
**3 май "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+
4 **май "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт 12+
**5 май "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр 6+
**4 май "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия 12+
**6 май "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**29 апрель "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). Башлана 12.00, 14.00 0+
**30 апрель "Слоненок"** (Р. Киплинг). Башлана 12.00, 14.00 0+
**1 май "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). Башлана 12.00, 14.00 0+

## *ИҒЛАН*

Утерянный студенческий билет, выданный Башкирским государственным медицинским университетом на имя **Ялмурзиной Индиры Мунировны**, считать недейсвительным.

ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# УНЫҢ ЙЫРҘАРЫН - ХАЛҠЫ...

## ул халҡын ярата



**Тормошта ла бик алсаҡ, ихлас кеше ул, йырҙары ла хисле булыуы менән айырылып тора. Уның йырҙарын халыҡ, оҡшай, оҡшамайға ла бүлмәй, барыһын да яратып тыңлай һәм йырлай. Һүҙебеҙ Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ш. Бабич исемендәге Республика Дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Юлай ҮҘӘНБАЕВ тураһында. Ошо көндәрҙә ул 50 йәшлек юбилейын билдәләне. Ошо уңайҙан файҙаланып, Юлай Хәмит улы менән әңгәмәләшеп алдыҡ.**

**➔ Ҡайҙа ғына, кем булып ҡына эшләһәгеҙ ҙә, барыбер халыҡ Һеҙҙе композитор итеп таныйҙыр, моғайын?**

- Ысынлап та, минең менән, тәү сиратта, композитор булараҡ һөйләшәләр. Мәҫәлән, телевидениела эшләгәндә төрлө тапшырыуҙарға килгән шағирҙар шиғырҙарын тәҡдим итә ине. Халыҡ менән аралашҡанда ла йырҙар яҙыусы тип ҡарауҙарын тоям. Тәүге йырҙарҙы 16 йәштәр тирәһендә, тәүге тапҡыр ғашиҡ булып йөрөгән саҡтарҙа яҙҙым. Уҡыған саҡта иһә тағы ла шаярып ҡына йырҙар яҙып ҡарай башланым. Курсташтарым Резеда Әминева, Химма Йәнбирҙиналар шиғырҙарына йырҙар яҙҙым, бергәләп концерттар менән сығыш яһай инек. Яңы йырҙар ҙа етешмәгәндер инде. Икенсе, өсөнсө йырҙарҙан һуң дәртләнеп киттем, күңелгә илһам ҡошо йышыраҡ ҡуна башланы. Композиторҙар, ғәҙәттә, йырҙарын иҫәпләмәй, ярамай. Шуға ла үҙ ғүмеремдә күпме йыр яҙғанмын, быныһын әйтә алмайым. Бер спектаклде биҙәгәндә генә лә әллә нисә көй яҙыла, уларҙың ҡайһылары халыҡ араһында танылыу ала, ҡайһыһылыр спектаклдә фон булараҡ ҡына бара.

**➔ Спектаклдәргә көй яҙыу көстө күп аламы? Композиторҙы был йүнәлеш ваҡламаймы?**

- Спектаклдәр эшләү миңә бик оҡшай. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында музыкаль етәксе булып эшләнем, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры, "Нур" Өфө дәүләт татар театры, Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе менән дә оҙайлы хеҙмәттәшлек иттек. Дөрөҫөн әйткәндә, спектакль өсөн яҙылған йыр ныҡ ихлас, хисле килеп сыға, сөнки пьесаның эсенә инәһең, образдарҙы күҙәтәһең, улар менән бергә көйөп-көлөп, улар кисергәнде кисереп яҙаһың. Йәғни, тойғоларҙы һауанан алмайһың, уйлап сығармайһың. Башҡорт халыҡ йырҙары ла бит шуға тәрән мәғәнәле, сөнки улар ниндәйҙер ваҡиғаға бәйле. Кисереп, әрнеп йырлағанда ғына улар уңышлы була. Спектаклдә лә шулайыраҡ.

Спектаклдәр өсөн яҙылған йырҙарҙың иң популяры - "Хушығыҙ, хыялдарым" спектакленән йыр булды. Әле лә йәмәғәт транспорттарында кешеләрҙең телефондарында шылтырау урынына ошо йыр ағылып киткәненә шаһит булғаным бар. Буранбай Исҡужин шиғырына "Аҡсарлаҡ" йыры бик танылыу яулағайны, бөгөн дә уны йыш башҡаралар. Сибай театры "Китмәгеҙ, торналар!" спектаклен хәҙер дүртенсе тапҡыр яңынан сығарҙы сәхнәгә. Уның йырын да халыҡ бик ярата. Спектакль бит йыры менән хәтерҙәрҙә ҡала, ваҡыты үтһә, спектакль репертуарҙан төшөп ҡала, ә йыр мәңге йәшәй. Композитор өсөн был бик яҡшы күренеш.

**➔ Ир-уҙаман өсөн 50 йәш йәшме ни ул, киләсәккә ниндәй уй-хылдар ҡороп йәшәйһегеҙ?**

- Ышанаһығыҙмы, мин үҙемде бөгөн 35-тә итеп тоям. Балаларға ҡараһаң ғына өлкәнәйгәнеңде таныйһың. Ҡатыным һөнәре буйынса табип, ул һаман да минең иң тәүге тыңлаусым, тәнҡитсем. Күп йылдар һынағанмын, йыр уға оҡшай икән, халыҡҡа ла оҡшаясаҡ. Халыҡты алдап булмай бит, ул матурлыҡты, ихласлыҡты шунда уҡ тоя. Тыңлаусыларымды бик ихтирам итәм, улар булғанда ғына минең ижадым бар. Ҡыҙыбыҙ әсәһенең юлынан китте, Санкт-Петербургта интернатурала уҡып йөрөй. Улыбыҙ ӨДАТУ-ны тамамланы, стюард һөнәрен үҙ итте. Сит илдәргә күп оса, инглиз телен яҡшы белә, инглиз теленән башҡортсаға тура тәржемә эшләй.

Икенсе һулыш асылғандай кеүек, шөкөр, эш тә күп. Республика халыҡ ижады үҙәгендә эшләп йөрөйөм, унда мин Беренсе башҡорт порталы өҫтөндә эшләйем. Унда йырҙар, көйҙәр тупланасаҡ, был ниндәйҙер кимәлдә халыҡ ынйыларын йыйыу, һаҡлау ҙа буласаҡ. Ғилми нигеҙгә таянып эшләйбеҙ, әлегә ул асылмаған. Ижад та үҙ юлы менән бара, ошо көндәрҙә генә Зөһрә Ҡотлогилдина һүҙҙәренә яҙылған "Аҡлы-ҡаралы тормош" тигән йырҙы Алһыу Бәхтиева башҡарып, премьераһын тәҡдим иттек. Сибай башҡорт дәүләт драма театрында Салауат Әбүҙәровтың әҫәре буйынса спектакль ҡуйып ҡайттыҡ, режиссер Азат Йыһаншин менән "Нур" театрында Әнғәм Атнабаевтың "Ул ҡайтты" спектакле өҫтөндә эшләйбеҙ. Бына шулай йәшәп, эшләп йөрөйбөҙ, барыһы өсөн дә Хоҙайға рәхмәтлемен, алда тағы ла илһамлы сәғәттәр күп булыр, тигән өмөттә ҡалам.

**Ләйсән ДАЯНОВА әңгәмәләште.**

ВИКТОРИНА

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Был юлы уҡыусыларыбыҙ иғтибарына шағирә Гөлнур Яҡупованың "Китап" нәшриәтендә яңы ғына донъя күргән "Йыртҡыс ҡаны" повесы буйынса Әлфиә Зәбдинова төҙөгән һорауҙарҙы тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Һәҙиәнең атаһы ҡайҙа китеп, һыуға төшкәндәй, юҡ була?**
а) айыуға китеп;
б) бүреләр артынан;
в) һеләүһенгә һунарға.
в) урманда йәшәп күнеккән.

**2. Ни өсөн Һәҙиә, бала табырға етешкән йәш ҡатын, Асанай ауылына бармай, ә Уҡтау мәмерйәһендә яңғыҙ төйәкләнә?**
а) билдәһеҙлектән, кешеләрҙән ҡурҡыу,шикләнеүҙәр һөҙөмтәһендә;
б) ауылға барған юлды юғалта;

**3. Һәҙиә ҡыҙына ниндәй исем ҡуша?**
а) Миләүшә;
б) Мәликә;
в) Миләш.

**4. Һәҙиәнең ейәне Айыухан Өфөлә ниндәй уҡыу йортон тамамлай?**
а) ауыл хужалығы институтын;
б) педагогия институтын;
в) урман техникумын.

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем беҙгә 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Гөлнур Яҡупова үҙенең автографы ҡуйылған "Йыртҡыс ҡаны" китабын бүләк итмәксе. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Алмас Шаммасовтың автографы ҡуйылған "Өй түбәмдә күгәрсендәр" китабын Өфө ҡалаһынан Илнур Хәсәнов отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**Викторинаны Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУЛЫНДА БАР - ҠОҘАҒЫЙ,

## ҡулында юҡ - ҡомағый

Боронғоноң бере юҡ, индегенең ҡоно юҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше донъяға килгәндә устарын йомоп килә - бар донъя минеке, йәнәһе. Донъянан киткәндә кешенең устары асыҡ була - ҡарағыҙ, үҙем менән бер ни ҙә алмайым, йәнәһе.

**(Талмуд).**

Бирәүҙәр - вазифаға, икенселәр - батырҙарға, өсөнсөләр - көскә, дүртенселәр Аллаға табына һәм ошо табыныуҙары арҡаһында үҙ-ара бәхәсләшә, ләкин... барыһы ла аҡсаға табына икәнен генә берәһе лә танымай.

**(Марк Твен).**

Бәләкәй генә бәләләргә ҡапҡа асыуҙан һаҡлан - улар артынан тағы ҡурҡынысыраҡ бәләләр инәсәк.

**(Б. Грасиан).**

Теләктәреңә сик ҡуйырға ынтылыу - аҡылһыҙлыҡтың иң юғары нөктәһе.

**(Дени Дидро).**

Дөрөҫ һүҙгә үпкәләргә ярамай, уның үҙенә лә шул уҡ дөрөҫлөк менән яуап бирергә кәрәк.

**(Данил Рудый).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ваҡыт бер батша металды алтынға әйләндереүҙең бөйөк серен белгән аҡыл эйәһе эргәһенә бара һәм унан шулай тип һорай: "Уҡытыусы, һин миңә лә ул серҙе ас һәм ғүмереңдең аҙаҡҡы көндәренә тиклем бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәҫһең. Һиңә мин үҙем батшаларса хөрмәт күрһәтәсәкмен". Ҡарт уны тыныс ҡына тыңлап тора ла, шулай тип һорай: "Ә һин ошо ғилем хаҡына үҙеңдең хакимлығыңды ҡорбан итергә әҙерһеңме?" "Нисек был турала һорарға телең әйләнә? - тип асыулана батша. - Мин бит бының өсөн һине язалаһындар, тип әмер бирә алам..." ти батша бер аҙ сығырынан сығып. "Юҡ, һин улай итә алмайһың, - ти ҡарт. - Минең тәнем физик ауыртыуҙан ҡурҡмай, ә йәнемә һин тейә алмайһың. Уның хужаһы - Бөйөк Аллаһы Тәғәлә. Хаҡы бер тинлек нәмәләрҙән мәхрүм булыуым миңә бер ни ҙә тормай". "Һин аҡыллы кешелер, моғайын, - ти батша йомшарып, - мин һине ебәрәм һәм алмашҡа бер нәмә лә һорамайым, хатта бүләкләйем".**

**Уҡытыусы уға йылмайып былай ти: "Һиңә рәхмәт белдерәм. Бына һин металдың алтынға әйләнеү серен белдең дә инде. Һинең миңә янап маташыуың - ул тутыҡҡан металдың бер буш киҫәге генә, әммә һин уны миһырбанлыҡ һәм шәфҡәтлелек күрһәтеп, алтынға әйләндерҙең..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5107
Заказ - 848/04